ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15-21 август (урағай) 2015

№33 (659)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Балаларыбыҙҙың Өфөһө...**

беҙҙең Өфөнән матурыраҡ



3

**Тамырҙарын юллай мадьярҙар**



5

**Һөнәребеҙҙең нескәлектәренә төшөнөп,**



сәхнәнең тәмен тоя башлаған сағыбыҙ 8-9

**Традицион ислам бармы?**



12

**Һайлауҙар** 14-15


***Мөхтәрәм йәмәғәт! Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә яҙылырға онотманығыҙмы, тип өндәшәбеҙ тағы бер тапҡыр. Баҫмабыҙға республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Һуңламағыҙ: 31 августҡа тиклем 2016 йылдың беренсе ярты йыллығына быға тиклемге хаҡ менән, йәғни 539 һум 76 тингә (индексы 50665) яҙыла алаһығыҙ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Көрсөк һәм санкциялар ауырлығын пенсионерҙар елкәһенә йөкмәтеп кенә бюджетты "ямап" булырмы?

*Вәкифә ХӘЙРУЛЛИНА, философия фәндәре докторы, профессор, иҡтисад фәндәре кандидаты:* Ил хөкүмәте көрсөк шарттарында берҙән-бер ҡотолоу юлын социаль сығымдарҙы ҡыҫҡартыуҙа һәм пенсия йәшен оҙайтыуҙа күрә, тип хәбәр итә шул киң мәғлүмәт саралары. Кинәйәнән башлайым һүҙемде. Шундай хәлде күҙ алдығыҙға килтерегеҙ әле: һыу юҡ, мәҫәлән. Сарсаткан, бер йотом ғына булһа ла һыу эҙләп, хәлдән тайған ваҡытта был хәлдең сәбәп-эҙемтәләре тураһында фәлсәфә һатып тороп булмай бит инде. Һыу кәрәк, шунһыҙ, һәләкәт тигән дилемма алға килеп баҫасаҡ... Кәрәгең тирәгеңде йыҡтыра, тиҙәрме әле? Ҡаҙна сығымдары буйынса социаль өлкәнең (24,4 процент) милли оборона һәм хәүефһеҙлек пунктынан (33,2 процент) һуң икенсе урында тороуын да иҫтән сығармайыҡ. Өҫтәүенә, пенсионерҙар һаны йылдан-йыл арта бара. Былтырғы мәғлүмәттәр буйынса пенсионерҙар дөйөм ил халҡының 41-42 процентын тәшкил итә. Йәмғиәтебеҙ баҙар иҡтисады шарттарына әҙерлекһеҙ күсте, уның механизмдары әле булһа эшләнмәгән, ярымсоциализм, ярымбаҙар шарттарында йәшәйбеҙ. Ҡытай һымаҡ, әкренләп, эволюцион юл менән барырға кәрәк булған, ә беҙҙә тоттолар ҙа булғанды емерә башланылар, ә яңыһы эшләнмәгән. Иҡтисадты үҫтереүҙең нигеҙендә етештереү төшөнсәһе ята, ә уның өсөн көс түгергә, илең, ғаиләң, шәхси мәнфәғәттәрең хаҡына хеҙмәт итергә кәрәк. Ә бөгөн, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, хеҙмәткә хөрмәт бөттө, тотош ҡулланыусылар йәмғиәте барлыҡҡа килде. Йылдар буйы эшләмәй ятыусылар бар. Байығандар байыған һайын, нисек тә законды урап үтеү юлдарын табып, күберәк урлап ҡалыу юлын ҡарай. Икенсенән, пенсияларҙы индексациялауҙы ҡыҫҡартыу тәҡдиме бойомға ашырыла ҡалһа, был индексациялауҙың закон нигеҙендә нығытылған тәртибен боҙоуға алып киләсәк, сөнки уның күләме инфляция кимәленән түбәнерәк булырға тейеш түгел, тип иғлан ителгәйне. Социаль өлкә электән дә ҡалдыҡ принцип буйынса тәьмин ителеп килде. Пенсионерҙарҙың күпселеге йәмғиәтебеҙҙең иң ярлы ҡатламына ҡарай. Мәҫәлән, 60 процентҡа яҡын пенсионерҙың килеме йәшәү кәрзиненең 1,4 йыйылмаһынан артмай. Икенсе яҡтан, халыҡ үҙе менән шундай мөғәмәләгә үҙе юл ҡуя, тип әйтер инем. Әлегесә, закон нигеҙҙәренең камиллыҡ менән айырылып тормауы ла ҡарттар пенсияһы менән нителәйҙәр - шуны эшләүгә юл ҡуя. Өлкән быуын кешеләрендә аңлылыҡ, намыҫ, илһөйәрлек сифаттары көслөрәк, шуға ла улар берҙән-бер йәшәү сығанаҡтары булған пенсияларының тейелгеһеҙлеген яҡлап, тауыш күтәрә алмай, сөнки ҡарттар - иң яҡлауһыҙ ҡатлам беҙҙә, уларҙың лайыҡлы тормошҡа хоҡуҡтарын пенсионерҙар партияһы ла, закондар ҙа, профсоюздар ҙа яҡлай алмай. Минә ҡалһа, ил етәкселеге Финанс министрлығы тәҡдим иткән былдай әхлаҡһыҙ аҙымға юл ҡуймаҫ, тип өмөтләнәм.

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# СӘСӘНДӘР ӘЙТЕШЕН...

## ролдәргә бүлеп уҡыйбыҙ

**Яңыраҡ интернет селтәрендә бер фекер алышыуға осраным. Унда башҡорт телендә сыҡҡан ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу-яҙылмау тураһында һүҙ бара ине. Ҡайһы берәүҙәрҙең замана ауырлығына, аҡса юҡлығына, барлыҡ мәғлүмәтте интернет селтәрендә табып булыуына һәм башҡа төрлө сәбәптәргә һылтаныуҙарына ҡаршы туған телендәге баҫмаларға яҙылыусы һәм башҡаларҙы ла ошоға өгөтләүсе әңгәмәселәр күпселек тауыш менән "еңеп" сығыуы ҡыуаныслы. Әлбиттә, еңел булмаған ваҡытта йәшәйбеҙ, ләкин һәр замандың да үҙ ауырлығы булған һәм алда ла буласаҡ. Ләкин әлегә тиклем рәсәйҙәр, шул иҫәптән Башҡортостан халҡы ла ваҡытлы матбуғат сараларын иң әүҙем уҡыусылар булды. Бөгөн был йәһәттән хәлдәр хөрт икәнлеген гәзит-журналдарҙың тиражына ҡарап та белеп була.**

**(Дауамы 2-се биттә).**



12+

✓ *Ағиҙелдең бөтөнләй яңыртылған яр буйы, тирә-яҡты ҡаплаған йәшеллек - былар барыһы ғәжәп киң ҡолас һәм тырышлыҡ менән генә түгел, юғары зауыҡ менән эшләнгән. Ижад ителгән, тип әйтеү, минеңсә, тағы ла дөрөҫөрәк булыр.*



ӘҘИПҺҮҘЕ

**Беҙҙең Өфөбөҙ ғәжәп матур урындарҙан - йәмле Ағиҙел буйындағы тауҙарҙан башлана. Килгән ҡунаҡтарҙы бейек ҡаяла Салауат сәләмләй. Салауат Юлаевты бөйөк тарихи эштәр атҡарыр өсөн Аллаһы Тәғәлә һайлаһа, батырҙың ғорур һәйкәле ҡуйылыр ошо бейеклекте уны ижад иткән һоҡланғыс талант Сосланбәк Тавасиев үҙе һайлаған. Төрлөсә тәҡдимдәр булһа ла, скульптор үҙенең фекерен барыбер ҡәтғи яҡлаған, тейешенсә раҫлата алған.**

# БАЛАЛАРЫБЫҘҘЫҢ ӨФӨҺӨ...

## беҙҙең Өфөнән матурыраҡ

Был бөйөк һәйкәлде хәҙер Өфөнөң башҡа берәй урынында күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Салауат һәйкәле баш ҡалабыҙ Өфөгә ҡабатланмаҫ йәм бирә, Салауаттың ҡаһарманлығы тарихыбыҙға дан өҫтәй. Шағир һәм яугир Салауат һәйкәле янында шиғыр байрамы үткәреү күптән инде матур йолаға әйләнде. Минең дә унда был осрашыуҙарҙағы уй-кисерештәрҙе сағылдырған "Йыйылабыҙ йыл да Салауатҡа" тигән шиғырымды уҡығаным булды. Быйыл июль аҙағында ла ҡәләмдәштәр менән ошондағы амфитеатрҙа асылған "Ватан" паркындағы этноауылға шиғриәт байрамына йыйылдыҡ...

Рәсәй буйлап йыл һайын ер йөҙөнән меңәрләгән ауыл юҡ була. Башҡортостанда ла уҙған һәм хәҙерге быуатта әллә күпме кешеләрҙең тыуған төйәктәре ни бары уларҙың хәтерендә генә тороп ҡалды. Ә уларҙың балалары иһә был изге урындар тураһында бөтөнләй белмәйәсәк.

Батша заманында ерен, иркен яҡлап күтәрелгән башҡорттарҙың әллә күпме ауылдары яндырылған бит. Был үткәндәрҙән ҡалған яра халыҡ хәтерендә һаман һаҡлана.

Бөгөн тыныс йылдарҙа ла ауылдарҙың юҡҡа сығыуы бигерәк аяныслы. Бына ошондай күңелһеҙ хәлдәр тотош Рәсәйҙә йышайғандан-йышая барған бер мәлдә гүзәл Өфөбөҙҙөң яңы бер биҙәге Салауат һәйкәле янында, Конгресс-холдан түбәндәге амфитеатрҙа урынлашҡан "яңы ауылды" күреү бына шундай уйҙарға килтерҙе. Исеме лә уның бик үҙенсәлекле - этноауыл. Башҡорт йәйләүендәге һымаҡ теҙелешеп ултырған ете тирмәнең һәр береһендә тормоштоң төрлө яҡтарын күрһәткән бик ҡыҙыҡлы хазина тупланған. Бында күҙҙең яуын алып торған милли кейемдәр ҙә, тылсымлы моңо менән арбаусы ҡурайҙар ҙа, көнкүреш әйберҙәре лә, эш-хеҙмәт ҡоралдары ла, еребеҙҙәге аҫыл таштар ҙа бар. Теләйһең икән, милли кейем кейеп, фотоһүрәткә лә төшөргә мөмкин.

Өфөлә ШОС һәм БРИКС саралары алдынан бик ҙур



төҙөлөштәр барыуы хаҡында матбуғатта йыш яҙҙылар, телевидениенан да даими күрһәтеп торҙолар. Ләкин бындай яңылыҡтар тураһында уҡып йәки зәңгәр экрандан ҡарап, радионан ишетеп белеү - бер нәмә, ә бына үҙ күҙҙәрең менән күреү бөтөнләй башҡаса. Салауат һәйкәле янында байтаҡтан бирле булғаным юҡ ине. Әле шиғыр байрамына килгәнемдә бындағы ғәләмәт ҙур үҙгәрештәрҙе күреп, хайран ҡалдым. "Ватан" паркындағы иркен майҙандар, әллә күпме юлдар, күпме баҫҡыстар, тирә-яҡтағы хозур тәбиғәтте байҡап торор өсөн эшләнгән уңайлы урындар, университет янында ҡалҡып сыҡҡан заманса ҙур ҡунаҡхана, Ағиҙелдең бөтөнләй яңыртылған яр буйы, тирә-яҡты ҡаплаған йәшеллек - былар барыһы ғәжәп киң ҡолас һәм тырышлыҡ менән генә түгел, юғары зауыҡ менән эшләнгән. Ижад ителгән, тип әйтеү, минеңсә, тағы ла дөрөҫөрәк булыр.

Этноауыл майҙанында башланған шиғри осрашыуға халыҡ күп йыйылғайны. Күрәһең, әҙәбиәтте ысын күңелдән яратыусы кешеләр булғандыр улар. Шулай булмаһа, бер сәғәткә һуҙылған шиғри байрамдың аҙағына табан һибәләй башлаған ямғырҙа ла халыҡ шулай таралмай тыңлап торор инеме ни?

Салауат һәйкәле тирәһендәге урындарҙы төҙөкләндереү эштәре байтаҡтан бирле алып барыла ине. Ошонда мөһабәт Конгресс-холл ҡалҡып сыҡты, тирә-яҡта йәшеллек артты, яңы фонтан майҙанды тағы ла нығыраҡ йәмләне. Һуңғы төҙөлөштәр был төбәкте донъя кимәлендәге объекттар менән ярышырлыҡ дәрәжәгә еткерҙе. Һәр яҡшы эштең дауамын күрге килә. Бындағы эштәр артабан да дауам итер, аҫтағы майҙандарға, этноауылға ололар, һаулығы ҡаҡшаған кешеләр, шулай уҡ сабыйҙарын арбала йөрөткән ҡатындар ҙа төшөп, ял итеп йөрөй алһын өсөн эстакадалар, яңы уңайлыҡтар тыуҙырылыр, тип өмөтләнәйек. Матур эштәрҙең матур дауамы ла булыр тип ышанайыҡ.

Шиғри байрамдан ҡайтышлай, опера һәм балет театры янындағы "Ете ҡыҙ" фонтанына һуғылдыҡ, беренсе тапҡыр ошо матурлыҡҡа оҙаҡ ҡарап торҙоҡ. Бында ла халыҡ күп йыйылған. Музыка ишетелә, әле талғын ғына, әле дәртләндергес. Һынландырылғын ете ҡыҙҙың һәр береһе хәҙер бейергә төшөп китер һымаҡ. Өфөнөң был яңы биҙәктәре сит илдәрҙән килгән иң юғары етәкселәрҙең дә күңелен яуламаҫлыҡ түгел шул.

"Ете ҡыҙ" фонтаны баш ҡалабыҙҙағы иң йәмле урындарҙан буласаҡ. Янынан китә алмай ҡарап торғанымда күптәнге замандарҙа - 1979 йылда яҙылған ошо шиғырымды хәтергә төшөрҙөм:

### Ете ҡыҙ

*Ете моңо булып Етегәндең,*
*Ете төҫө булып йәйғорҙоң,*
*Балҡынығыҙ алда. Моңоғоҙҙан*
*Ҡанат киреп, донъям яңырҙы.*

*Бейеүегеҙҙә күпме тыйнаҡ ялҡын,*
*Йәшерен дәрт тора урғылып.*
*Һыуһындарым ҡанмаҫ был күңелгә...*
*Етегеҙгә ғашиҡ бер юлы.*

*Ете ҡатынан ерҙең аҡтарылып,*
*Күтәрелдем ете күктәргә.*
*Был аҙнамдың бөтә ете көнө*
*Торҙо илгәҙәк бер күкрәүҙән.*

*Эй, ете ҡыҙ!*
*Йөрәгемә төштө,*
*Уйылып төштө ете ҡуҙ-күмер.*
*Бер аҙнаның ете көнөнән дә*
*Ҡыҫҡа үкенесле был ғүмер.*

Этноауыл майҙанындағы шиғриәт сәғәте, "Ете ҡыҙ" фонтанына ҡарап тороуҙар - был көн минең өсөн онотолмаҫ байрам булды. Яҡын кешеләрем менән, ейәнем, бүләм, бүләсәрем менән ҡала буйлап ҡыуанып йөрөнөк. Балалар иркен майҙандарҙа рәхәтләнеп уйнаны, беренсе ҡат ҡәләмдәштәремдең сығыштарын тыңланы , "Ете ҡыҙ" фонтанынан күҙҙәрен алманы. Уларҙың шатланғанын күреп, минең дә шатлығым артты. Сабыйҙар әле күргәндәрҙең күбеһен онотасаҡ. Ләкин мин шуға инанам: әлеге балаларҙың Өфөһө беҙҙең Өфөнән матурыраҡ буласаҡ. Һәр хәлдә, быға бик ышанғым килә: шулай булырға тейеш.

Һәр заман үҙенең ауырлыҡтары менән килһә лә, тормош барыбер алға бара. Әле бына сағыштырып ҡарайым. 1957 йылда яңы ойошторолған Башҡорт дәүләт университетының тәүге студенттары булып киткәндә, был уҡыу йортоноң әлеге төп бинаһы төҙөлөп тә бөтмәгәйне, янында бер генә лә заманса ятаҡ юҡ ине. Телеүҙәк, уның башняһы яңы ҡалҡып ҡына килә ине. Хәҙер Салауат һәйкәле торған ерҙәрҙә бер ҡатлы өйҙәр теҙелгән ауылса урамдар ине. Байтаҡ һабаҡташтарыбыҙ шунда фатирҙа йәшәне. Хәҙерге Боҙ аренаһы түгел, хатта Спорт һарайы ла юҡ ине. Бер саҡ улар баш ҡалабыҙҙы биҙәр тип уйламай ҙа инек. Башҡорт һәм рус театрҙарының яңы биналары, "Нур" татар театры һәм ҡалалағы башҡа әллә күпме матур-матур йорттар егерменсе быуат аҙағында - егерме беренсе быуат башында төҙөлдө бит. Тарих өсөн әллә ни оҙон ара түгел, әммә Өфө өсөн ни тиклем ҙур үҙгәрештәр. Шуға ла бөгөнгө балаларҙың Өфөһө беҙҙең Өфөнән матурыраҡ булыр тип ышанам да инде.

Уңыштарҙы яулауы ғына түгел, уларҙы һаҡлауы ла бик ҡатмарлы эш, яуаплы бурыс. Матурлыҡты емерергә әҙер тороусы көстәр, аңынан яҙған тәртипһеҙ бәндәләр ғүмер буйы булған һәм буласаҡ. Һоҡланыр гүзәллектәребеҙҙе һаҡлай ҙа беләйек, Өфөбөҙгә, Ағиҙелебеҙгә, Шүлгәнташыбыҙға, Торатауға һоҡланып йәшәйек, әммә уларҙы һаҡларға ла тырышайыҡ. Тыуған телебеҙгә, моңдарыбыҙға ғашиҡ булып ҡыуанайыҡ, тик был хазиналарҙы һаҡлау хәстәрлеген дә онотмайыҡ. Һоҡланайыҡ, әммә вайымһыҙлыҡтан, хыянаттан, матур донъябыҙҙы емерткес яуызлыҡтарҙан һаҡланайыҡ. Үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡлайыҡ.

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, республикала йыллыҡ инфляция 14,3 процент кимәлендә. Рәсәй буйынса был күрһәткес 15,6 процент тәшкил итә. Июлдә картуфҡа, кишергә, һарымһаҡҡа (11,5-25,0 процентҡа), алмаға (7,0), сәйгә, шәкәргә, онға, кәнфиткә, туңдырмаға (1,1-3,5), әфлисунға (26,7) хаҡтарҙың артыуы теркәлгән. Шул уҡ ваҡытта сөгөлдөр, кәбеҫтә, помидор һәм ҡыяр (12,0-39,8 процентҡа), лимон, виноград, банан (9,9-19,9), шулай уҡ йомортҡа (5,2) һәм ярмалар (1,9-2,6) арзанайған. Тәмәке 5,2 процентҡа, яңы сит ил автомобилдәре - 3,9, бензин - 2,3, балалар кейеме 2,4 процентҡа ҡиммәтләнгән. Миҙгелле өҫ һәм аяҡ кейемдәренә, төҙөлөш материалдарына, көнкүреш техникаһына, компьютерҙарға, элемтә сараларына һәм алтын биҙәүестәргә хаҡтарҙың төшөүе күҙәтелә.

✓Августа Башҡортостанда сағыштырмаса йылы, ә сентябрҙә ҡояшлы көндәр күберәк буласаҡ. Башгидрометтың агрометеорология бүлеге начальнигы Татьяна Власова республика Ауыл хужалығы министрлығында үткән видеоселектор кәңәшмәһендә шулай тип белдерҙе. Августа һауа температураһы төндә 8-13 градус йылы, көндөҙ 21-26 тәшкил итәсәк. Август уртаһында көндәр һалҡыная, төндә - 5-10, көндөҙ 15-20 градус йылы. Республиканың төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш районларында ҡыҫҡа ваҡытлы ямғырҙар яуыуы көтөлә.

✓"Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһы Ҡара диңгеҙ буйындағы курорттарға рейстар асты. Компания "Өфө - Гагра" һәм "Өфө - Адлер" йүнәлештәре буйынса август айында - биш һәм сентябрҙә өс сәйәхәт планлаштырған. Төбәкара рейстарҙа 57 кеше һыйҙырышлы VDL 501E1 маркалы уңайлы автобустар йөрөй. Салонда телевизор, кондиционер ҡуйылған. Автобустар менән тәжрибәле водителдәр идара итә. Был юлда пассажирҙарҙың хәүефһеҙлеген гарантиялай. "Өфө - Гагра" һәм "Өфө - Адлер" рейстары 15, 19, 24, 28 августа һәм 2, 6, 11 сентябрҙә башҡарыласаҡ. Автобустар көндөҙгө сәғәт 2-лә Спорт һарайы майҙанынан ҡуҙғала.

✓12 августан "Башнефть" бензиндың ҡайһы бер төрҙәренә һәр литр өсөн 30 тингә хаҡ күтәрҙе. "Нормаль-80" - 31 һум 70 тин, "Регуляр-92" - 32,70; АТUМ-92 - 33,20; "Премиум-95" - 36,20; "Супер-98" - 38,70 тәшкил итә. Дизель яғыулығына хаҡ үҙгәрмәне.

**“Башинформ”дан.**

*✓ Йәшлек ваҡытындағы өфөләр менән сағыштырғанда, бөгөнгө йәштәр һәм урта быуын йәшендәгеләр үҙҙәрен күпкә ышаныслыраҡ тота һәм тормоштоң асылын тиҙ аңлай. Өфөләрҙә ололарға ҡарата хөрмәт тә юғалмаған.*

*ХАЛЫҠ ТАУЫШЫ*

# ҮҘ ЙОРТОМДО ТӨҘӨЙӨМ -
## ер бирегеҙ!

**Йылдың тәүге яртыһында Өфө ҡала округы хакимиәтенә 22181 яҙма мөрәжәғәт килгән. Уларҙың 95,54 проценты - ғариза, 4,29 проценты - ялыу, 0,09 проценты - тәҡдим, 0,3 проценты - рәхмәт хаты. Электрон бәйләнеш каналдары аша алынған мөрәжәғәттәрҙең күләме 2 процентҡа артҡан. Башҡортостан Башлығы хакимиәтенең электрон ҡабул итеүе һәм ҡала округы хакимиәтенең сайты аша 9881 мөрәжәғәт килгән.**

Бигерәк тә күп балалы ғаиләләр (682) һәм инвалид бала тәрбиәләүсе ғаиләләр (190) йыш мөрәжәғәт итә. Уларҙың күпселеге (705) шәхси торлаҡ төҙөлөшө өсөн ер участкаһы бүлеү мәсьәләһенә ҡағыла.

Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған сараларға бәйле, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙан, ветерандарҙан һәм инвалидтарҙан мөрәжәғәттәр артҡан. Йылдың тәүге яртыһында был категория граждандарынан 201 мөрәжәғәт килһә, шуларҙың 49-ы - торлаҡ, 92-һе - социаль тәьминәт, 22-һе торлаҡты ремонтлау һәм тотоу мәсьәләләре буйынса. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтарының тол ҡалған ҡатындарынан 122 мөрәжәғәт килгән. Уларҙы ла үрҙә атап үтелгән проблемалар борсой.

Ҡалған социаль категория граждандары буйынса мөрәжәғәттәр һаны кәмегән. Коллектив мөрәжәғәттәр һаны 10 процентҡа кәмеп, 810 тәшкил иткән. Нигеҙҙә, улар торлаҡ хужалығы (30,9 процент), төҙөлөш (22,1 процент), торлаҡ (11,4 процент), ерҙе файҙаланыу (11,5 процент) мәсьәләләренә ҡарай. Аноним мөрәжәғәттәр ҙә килеүен дауам итә. Алты айҙа шундай 281 мөрәжәғәт алынған.

Баш ҡала халҡын бигерәк тә торлаҡ, коммуналь һәм ҡала хужалығы, транспорт эшмәкәрлеге мәсьәләләре борсой. Шундай мөрәжәғәттәр һаны 8155 булған. Ерҙе файҙаланыу һәм ер менән ҡулланыу мәсьәләләре буйынса 5773 (26 процент), архитектура, төҙөлөш һәм реконструкция мәсьәләләре буйынса 3542 (16 процент) мөрәжәғәт ҡабул ителгән. Торлаҡ шарттарын яҡшыртыу мәсьәләләре буйынса 2083 (9,4 процент) мөрәжәғәт килгән.

Күберәген баш ҡаланың Ленин районы халҡы мөрәжәғәт итә (10 мең халыҡҡа 223 мөрәжәғәт тура килә), иң әҙе - Совет районында (10 мең халыҡҡа 164).

Ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы, ҡала округы хакимиәтенең һәм ҡала районары хакимиәттәренең вәкәләтле кешеләре мөрәжәғәттәр буйынса граждандарҙы шәхсән ҡабул итеү ойоштора. Өфө ҡала мэры һәм уның урынбаҫарҙары тарафынан ярты йылда 234 кеше ҡабул итеһә, район хакимиәттәре башлыҡтары һәм уларҙың урынбаҫарҙары тарафынан 2299 кеше ҡабул ителгән, барлыҡ мөрәжәғәттәр буйынса ла граждандарға һәм юғары власть органдарына яуаптар бирелгән.

*БАШ ЙОРТТА*

# ЯРАТАЙЫҠ ӨФӨБӨҘҘӨ...



**Өфөлә тыуып үҫкән һәм ошонда йәшәгән кеше булараҡ, баш ҡала тураһындағы фекерҙәремде гәзит уҡыусыларға ла еткерергә булдым әле.**

Тәүҙән үк билдәләп үткем килә - Өфө тик ыңғай яҡҡа үҙгәрә. Етмеш тиҫтә йылдан ашыу ғүмер итеү дәүеремдә заманаларҙың төрлөһөн күрергә тура килде. Өфө лә, теге йәки был заманға ярашлы, үҙ төҫөн, йөҙөн үҙгәртте, әммә булмышы менән мин бала саҡтан белгән ғорур, тиҙ генә бер кемгә лә бойһонмаҫ ҡала булып ҡалды. Ҡаланы, минеңсә, архитектура, парктар һәм башҡа объекттар түгел, ә унда йәшәгән халыҡ барлыҡҡа килтерә, уның йөҙөн булдыра. Ситтән килгән ҡунаҡ та, тәүҙә ҡаланың тышҡы йөҙөнә күҙ һалһа ла, аҙаҡҡы фекерен өфөләргә ҡарап төйнәп ҡуялыр, тимен. Ә өфөләр һәр ваҡыт үҙҙәренең ярҙамсыллығы, алсаҡлығы һәм ҡунаҡсыллығы менән айырылып торҙо һәм әле лә был сифаттар юғалмаған, тип әйтә алам. Үҙемдең бала саҡ, йәшлек ваҡытындағы өфөләр менән сағыштырғанда, бөгөнгө йәштәр һәм урта быуын йәшендәгеләр үҙҙәрен күпкә ышаныслыраҡ тота һәм тормоштоң асылын тиҙ аңлай. Өфөләрҙә ололарға ҡарата хөрмәт тигән мөнәсәбәт тә юғалмаған - тимәк, ҡаланың киләсәге ышаныслы, сөнки ихтирамлы була белгән кешеләр генә үҙе тирәһендә яҡшы тормош булдырырға һәләтле.

Баш ҡалаға республиканың төрлө мөйөштәренән килеп, Өфөлә үҙенең йортон булдырыусы, үҙ нигеҙен ҡороусылар бихисап. Яңы таныштарына ҡарата бик үк мәрхәмәтле булмаһа ла, уларҙың юлына күпләп һынауҙар ҡуйһа ла, Өфөгә юл тотоусылар һирәгәймәй. Шуларҙың иң ныҡышы һәм тырышы ғына үҙен өфөләр рәтенә индереүгә өлгәшә. Ә Өфөнөң тиҙ үҫеүенә, йылдам темптар менән үҙ сиктәрен киңәйтеүенә ҡарағанда бындайҙар күп. Йылдан-йыл төҙөлөш эштәре әүҙемләшә, яңы ер биләмәләре үҙләштерелә һәм "яңы" өфөләр өсөн эшкә егелә. Тимәк, яратҡан ҡалабыҙ тағы ла ҙураясаҡ, төҙөкләнәсәк һәм матураясаҡ. Бының шулай булырына ышанам, сөнки бөтә тормошом буйына алып барған күҙәтеүҙәрем ошоно дәлилләй. Өфөбөҙҙө ярятайыҡ, уның матур киләсәге өсөн һәр беребеҙ ҡулдан килгәнде эшләйек.

**Ғаяз ХӘТМУЛЛИН.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# СОЦИАЛЬ ЙҮНӘЛЕШ ИКӘН,
## тимәк, кеше тураһында хәстәрлек



**Йылдың тәүге яртыһы һөҙөмтәләре буйынса Өфө ҡалаһы бюджеты үҙенең социаль йүнәлешен һаҡлай. Сығымдарҙың дөйөм күләмендә мәғариф (39 процент), социаль өлкәнең башҡа тармаҡтары, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ (19 процент) алып тора. Алты айҙа ҡала 10 миллиард 935 миллион һум килем алһа, сығымдар 11 миллиард 668 миллион һум тәшкил итә. Йәштәр сәйәсәте өлкәһе һәм балаларҙы һауыҡтырыуға тотонолған сығымдар 140 миллион һум булһа, социаль сәйәсәт өлкәһе - 271 миллион һум, мәҙәниәт - 220 миллион һум.**

Автомобиль юлдарын һәм инженер ҡоролмаларын ремонтлауға һәм тотоуға, ағастар ултыртыуға, урамдарҙы яҡтыртыуға бюджеттан 888 миллион һум бүленгән. "Дәүләт иҡтисады"на сығымдар 2 миллиард 970 миллион һум тәшкил итә. Был пунктта төп йүнәлеш булып автомобиль юлдарын төҙөү һәм реконструкциялау (1 миллиард 491 миллион һум), пассажирҙарҙы автотранспорт менән йөрөтөү буйынса инеп етмәгән килемде ҡаплау (331 миллион һум), дөйөм файҙаланыуҙағы юлдарҙы төҙөү, капиталь ремонт үткәреү һәм уларҙы төҙөкләндереп тороу сараларын финанслау (1 миллиард 79 миллион һум) тора.

Ә инде бюджет дефицитын ҡаплау өсөн 1 миллиард 317 миллион һум өҫтәмә аҡса йәлеп итеү планлаштырыла. Ай башында 540 миллион һумға кредит алыуға рөхсәт бирелгән дә инде, әлеге ваҡытта 677 миллион һум кредит биреүгә конкурс иғлан ителгән. Заем средстволары оҙайлы ваҡытҡа алына һәм был муниципаль бурысты тигеҙ итеп түләү, планлаштырылған эштәрҙе үтәү мөмкинлеген бирә. Ҡаланың ыңғай социаль-иҡтисади үҫеше һөҙөмтәһе һәм юғары кредит рейтингы буйынса банктар Өфө ҡала округы хакимиәтенә муниципалитет өсөн уңайлы шарттарҙа кредит бирергә әҙер.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓19 сентябрҙә Башҡортостанда Театр төнө уҙғарыла. Республика Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, мәҙәни акция Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына һәм Әҙәбиәт йылына арнала. Быйылғы Театр төнөнөң төп үҙенсәлеге - театр бульвары, унда әкиәт персонаждарын осратырға, төрлө ижади коллективтарҙың сығыштарын ҡарарға, шулай уҡ үҙеңә лә сығыш яһарға мөмкин буласаҡ. Акцияла ҡатнашырға теләгән ижади коллективтар ғаризаларын mkrb@bashkortostan.ru электрон почтаһына ебәрә ала. Хаттың темаһына "Театр төнө 2015" тип яҙырға кәрәк.

✓8 августан Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексҡа үҙгәрештәр ғәмәлгә инде. Уға ярашлы, эргәлә "Эвакуатор эшләй" тигән яҙыу булмаһа, автомобилде алып китеү тыйыла. Был яҙыу "Туҡталыш тыйыла" тигән юл билдәһе эргәһенә ҡуйылырға тейеш. Әгәр тыйыусы билдә янында иҫкәртеүсе күрһәткес юҡ икән, эвакуациялау законһыҙ тип иҫәпләнә, һәм автоһәүәҫкәр суд аша килтерелгән зыянды ҡаплауҙы талап итеү хоҡуғына эйә.

✓20 августа "Ватан" этнопаркында милли стилдәге туй йолалары күрһәтеләсәк. Тамашаны халыҡ ижады белгестәре, театр артистары ойоштораcаҡ. Байрам 18 сәғәттә башлана.

✓Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығы төбәктә урман янғындарын һүндереү тиҙлеге тураһында мәғлүмәтте асты. Әлеге мәлгә ул 96 проценттан ашҡан. Шуның менән бергә быйыл республика урмандарында сыҡҡан 28 янғындың 17-һе йәки 61 проценты шул уҡ көндө һүндерелгән. Янғын йәһәтенән хәүефле миҙгел башланғандан алып 81 гектарға яҡын урман фонды биләмәһе уттан зыян күргән, шуларҙың 75 гектары - урман менән ҡапланған майҙан.

✓Урындағы һайлауҙарҙа тәүге тапҡыр ваҡытынан алда тауыш бирергә мөмкин буласаҡ. Командировкаға китеү йәки отпускыға сығыу сәбәпле 13 сентябрҙә тауыш бирә алмаған һайлаусы 2 сентябрҙән 12-нә тиклем үҙенең участкаһында ваҡытынан алда быны эшләй ала. Ошо хаҡта Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһы башлығы хәбәр итте.

БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

# ТАМЫРҘАРЫН ЮЛЛАЙ МАДЬЯРҘАР

**Башҡорттар менән хәҙерге венгрҙар араһындағы бәйләнештәр хаҡында бәхәстәр әленән-әле тыуып тора. Ошо көндәрҙә "Башинформ" агентлығында тамырҙарын юллап Башҡортостанға килгән венгр ғалимдары ҡатнашлығында үткән матбуғат конференцияһындағы һөйләшеү был йүнәлештә яңы аҙым булды.**



Венгрия ғалимдары - Шүлгәнташта.

Силәбе өлкәһенең Уйылға экспедицияһы етәксеһе, тарих фәндәре докторы Сергей Боталов белдереүенсә, Рәсәй-Венгрия ғалимдары ҡатнашлығындағы тикшеренеү эштәре комплекста алтынсы йыл дауам итә һәм ул Рәсәй йәмғәтселегенең генә түгел, Европа илдәренең, бигерәк тә Венгрия менән Болгария ғалимдарының иғтибарын йәлеп итә. Сөнки ул әлеге көндә Урал-Волга буйы, Көнбайыш Себер, Алтай, Ҡаҙағстанда йәшәүсе хәҙерге халыҡтарҙың урта быуаттағы мәҙәни генезисының мөһим мәсьәләләрен хәл итеүгә генә мөмкинлек биреп ҡалмай, ә венгрҙар хәҙерге территорияларын үҙләштергән осорҙағы Карпат һөҙәклеге һәйкәлдәре менән оҡшашлыҡҡа эйә материалдарҙың булыуы менән дә әһәмиәтле. Шуға ла венгр ғалимдары Уйылға комплексына ҙур иғтибар бирә. Ошоға оҡшаш материалдар Башҡортостан ғалимдары тарафынан Ҡаранай, Бикеш, Лағыр ҡәберлектәрендә арҙаҡлы мәтр Нияз Мәжитов тарафынан табылған да инде.

Быйылғы экспедиция барышында венгр ғалимдары Атилла Тюрк менән Петер Ланго Көньяҡ Урал менән дә танышырға теләүҙәрен белдерә һәм был эшлекле сәфәргә шул этәргес була. Ғалимдар Нязепетровск районынан юл алып, уғырҙарҙың изге урындарында булып, Мәсәғүт зонаһы, Ҡаранай, Бөрө ҡәберлектәре менән танышца, баш ҡалалағы "Өфө-II" ҡаласығына зыярат ҡыла, артабанғы юлдары Охлебинино ҡәберлеге, Шүлгәнташ мәмерйәһе, Байыш ҡурсыулығы, Баймаҡ районы ҡурғандары аша Арҡайымға йүнәлә.

Атилла Тюрк бедереүенсә, улар Башҡортостан территорияһына килеп инеү менән уның матурлығына, ландшафтына иҫе китә. "Башҡортостандың байлығына һоҡланыуҙы аңлатырлыҡ һүҙҙәр ҙә табыуы ауыр. Экспедицияла беренсе йыл ғына булмаһаҡ та, шундай ҙур программаны эсенә алған сәфәрҙә беренсе тапҡырбыҙ. Сергей Геннадьевич һанап киткән һәйкәлдәр менән Нияз Мәжитовтың хеҙмәттәре аша күптән танышбыҙ. Әммә уларҙы үҙ күҙҙәрең менән күреү бөтөнләй икенсе тәьҫораттар тыуҙыра һәм бик файҙалы. Бөгөнгө венгрҙарҙың ата-олаталары ҡайҙалыр Көньяҡ Уралда формалашҡан, тигән күҙаллауҙар йәшәй, шуға ла беҙгә бәйләнештәрҙе ныҡышырға һәм был процестың нисек барлыҡҡа килгәнен өйрәнергә кәрәк. Бер кемгә лә сер түгел, Советтар Союзы тарҡалғас, сәйәси генә түгел, ғилми бәйләнештәр ҙә юҡҡа сыҡты. Бөгөн элекке мөнәсәбәттәрҙе яңы кимәлдә булдырырға кәрәк. Әгәр был процесс артабан да дауам итһә һәм нығынһа, беҙҙең студенттар һеҙҙә рус телен өйрәнә алыр ине, сөнки беҙҙең университеттың археология кафедраһында венгрҙарҙың боронғо тарихы специальносы буйынса белем алыусы студенттарға рус телен өйрәнеү мөһим - әсбаптар тик рус телендә генә. Шулай уҡ һуңғы ваҡытта табылған яңы табыштарҙы ла өйрәнеү зарур", - тине ул.

"Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы директоры Гәүһәр Батталова белдереүенсә, венгр ғалимдарында "Өфө-II" ҡаласығы шул тиклем ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған. Сит ил ҡунаҡтары бындағы артефакттарҙы ысын ғилми асыш тип билдәләй. Атилла Тюрк башҡорт коллегаларының эшен баһалап: "Венгр археологтары өсөн генә түгел, донъя археологтары өсөн дә "Өфө-II" ҡаласығы етди әһәмиәткә эйә. Ҡеүәтле мәҙәни ҡатлам, археология табыштары, ентекле эш һәм Өфөләге коллегаларыбыҙ ҡулланған техника беҙҙә ҙур ҡәнәғәтлек тыуҙыра. Мин бында ҡаҙыныу эштәре генә алып барылып ҡалмайынса, монографиялар ҙа нәшер ителеүенә шатмын. Был эш артабан да дауам итер тип ышанам. Ул Көнсығыш Европа өсөн археология, крайыбыҙҙың тарихы буйынса бик күп мәғлүмәт бирә. Беҙ студенттар менән бында ҡаҙыныу эштәрендә ихлас ҡатнашасаҡбыҙ һәм Башҡортостандағы коллегаларыбыҙҙы Венгрияла көтөп ҡалабыҙ", - тигән. Ғөмүмән, "Боронғо Өфө" һуңғы йылдарҙа туристарҙың ғына түгел, ә Европа ғалимдарының ныҡлы иғтибар үҙәгенә әйләнеп бара һәм ул республикала ла шундай етди иғтибарға лайыҡ булһын ине, тип теләргә генә ҡала.

Филология фәндәре докторы, РФА Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Фирҙәүес Хисаметдинова әйтеүенсә, башҡорт-венгр бәйләнештәре XIII быуаттан уҡ билдәле. Ә инде был мәсьәләне өйрәнеүҙе һәм уртаҡ тамырҙар эҙләүҙе Рәсәй ғалимдары XVIII быуатта башлай. Ғалимдар фекеренсә, венгр халҡының төп нигеҙен тәшкил иткән ете ырыу-ҡәбиләнең дүртеһе төрки сығышлы. Был да, Башҡортостанда, уға сиктәш яткан күрше төбәктәр райондарында табылған тарихи һәйкәлдәрҙең төрки һыҙаттарға эйә булыуы ла башланған эште артабан дауам итеү зарурлығына этәрә.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# КЕМ КҮПМЕ АҠСА ЭШЛӘЙ?

**Башҡортостанстат иҡтисади эшмәкәрлек төрҙәре буйынса республика предприятиелары һәм ойошмалары хеҙмәткәрҙәренең уртаса хеҙмәт хаҡы динамикаһын тикшерҙе.**

2015 йылдың ғинуарынан майға тиклемге осорҙа файҙалы ҡаҙылмалар табыу буйынса предприятие хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы - 9,8, нефть эшкәртеүселәрҙеке 3,8 процентҡа кәмегән. Әйткәндәй, Башҡортостанда тап ошо һөнәр эйәләре иң юғары эш хаҡы - 44 меңдән 58 мең һумға тиклем - ала.

Башҡа тармаҡтарҙа эш хаҡы түбәнерәк һәм 11,5 мең һумдан алып (күн эшкәртеү-аяҡ кейеме предприятиелары) 35,7 мең һумға тиклем (финанс ойошмалары) тирбәлә. Ауыл һәм урман хужалығында (айына 13,5 мең һум), туҡыу һәм тегеү сәнәғәтендә (13,9 мең), ресторан һәм ҡунаҡханаларҙа (15 мең) ла эш хаҡы аҙ. Химия тармағында (айына 35 мең), дәүләт идара итеүе һәм хәрби хәүефһеҙлекте тәьмин итеү, социаль страховкалау өлкәһендә (34,5 мең), электр энергияһы, газ һәм һыу етештереү һәм бүлеү (31,1 мең), транспорт саралары һәм ҡорамалдар етештереү буйынса предприятиеларҙа (30,2 мең) хеҙмәт хаҡы юғарыраҡ.

Ғинуар-май айҙарында республика буйынса уртаса эш хаҡы 24,7 мең һум тәшкил иткән. 2014 йылдың ошо осорона ҡарата ул 3,5 процентҡа артҡан, әммә хаҡтарҙың күтәрелеүен иҫәпкә алғанда, 10,1 процентҡа кәмегән.

# МАХСУС УРЫН ҠУЛАЙЛЫ

**Башҡортостанда 30 муниципаль берәмек терегөмөшлө лампалар йыйыу һәм уларҙы ташыу буйынса килешеүҙәр төҙөгән.**

Мәҫәлән, Стәрлетамаҡ районында 39 махсус контейнер ҡуйылған һәм тағы ла бишеүҙе һатып алыу планлаштырыла. Бөгөн ике меңдән ашыу кеше йәшәгән "Рощинский" совхозында ике контейнер тора. Асыҡланыуынса, халыҡ экобокстарҙы тәғәйенләнеше буйынса файҙалана. Улай ғына ла түгел, унда лампочкаларҙан тыш, тәмәке ҡаптары ла табылған, күрәһең, кемдер бокслы ғәҙәти урна менән бутаған.

Рощинский ҡасабаһында йәшәүсе Рузалия Зәбәйерова әйтеүенсә, бындай контейнерҙар ҡуйылғас, ул бик шатланған. "Быға тиклем энергияны һаҡлаусы лампаларҙы балконда йыйырға тура килә ине, сөнки уларҙы сүп-сар менән бергә ташлау хәүефле. Хәҙер иһә бик уңайлы - бараһың да янған лампочканы шунда һалып китәһең. Иң мөһиме, тәбиғәткә бер ниндәй ҙә зыян килтермәйһең", - тине Рузалия.

"ЭкоСервис" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте директоры Евгений Абрамовских һүҙҙәренсә, кешеләр яңы махсус контейнерҙарға ыңғай ҡарай: "Лампалар бик тиҙ йыйыла. Уларҙы икенсел эшкәртеү өсөн ҡулланыуҙың мәғәнәһе юҡ, шуға күрә юҡ итәбеҙ. Контейнерҙарға лампаларҙы ғына түгел, шулай уҡ эшлектән сыҡҡан батарейкаларҙы ла ҡалдырырға мөмкин, сөнки улар ҙа хәүефле тип һанала", - ти ул.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һутты һайлап эс

❖ Сиренә ҡарап, һутты ла һайлап эс. Томат, борос, редис, сөгөлдөрҙән һуты ҡан баҫымы юғары саҡта эсеү файҙалы.

❖ Әфлисун, кишер, өрөк, ҡабаҡтың ҡыҙыл-һарғылт һуттары ҡан тамырҙары ҡыҫылыуҙан интегеүселәргә, күнел төшөнкөлөгөнән яфаланыусыларға эсеү сихәтле.

❖ Ашҡаҙан йәрәхәте һәм ревматизм менән сирләгәндәргә ананас, алма, кукуруз, банандың һары төҫтәге һуттары файҙалы.

### Стресс

❖ Стрестан ҡотолоуҙың иң дөрөҫ ысулы - тундырма ашау, ул күңел төшөнкөлөгөнән дә ҡотҡара.

### Шәкәр сире

❖ Лавр япраҡтары, бәпембә тамыры, көтөүсе муҡсаһы үләне, фасолдең борсаҡһыҙ кипкән ҡуҙаҡтары, күк сәскә (василек), йүкә сәскәһе, ҡара емеш япраҡтарын ваҡларға, бергә ҡушып болғарға. 2 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһы өҫтөнә 400 мл ҡайнар һыу ҡойоп, һыу ваннаһында 15 минут ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 10 минут алда 1/3 стакан эсергә.

### Һоло шифалы

❖ Ҡан баҫымы юғары булғанда 2 кг һолоно йыуып, ярты сәғәткә 3,5 литр һыуға һалып ҡуйырға, унан һуң һүрән утта 2 сәғәт бешереп һөҙөргә. Ҡан баҫымы күтәрелгән көндәрҙә ярты стакан һөткә шул уҡ күләмдә һоло төнәтмәһе ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә.

### Тын алыуы ауырлашһа...

❖ Ҡапыл тын алыуы ауырлашһа, 50 г һарымһаҡты таҙартып төйөргә лә, 50 г сусҡа майына ҡушып ҡайнатырға. Тын алыуы ҡыйынлашҡанда шуның менән күкрәкте ыуырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Улар "урынһыҙ" ҡалыуҙы ололарға ҡарағанда күпкә ауырыраҡ кисерә һәм был кире кисерештәр мәктәптән өркөүҙең беренсе сәбәпсеһе була ла инде. Был тәңгәлдә күп нәмә уҡытыусының психологик алымдар ҡуллана белеүенән тора.*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# ТОРНАЛАЙ ТОҒРО БУЛ

**Башҡорт халыҡ ижадында торна кешегә хас сифаттарға, уйҙарға, тойғоларға эйә. Теләктәрҙә торна тоғролоҡ билдәһе, торналай тоғро бул, тиҙәр.**

Тотемик мифтарҙа һәм ырыу-ара бәйләнештәрен аңлатҡан һүҙҙәрҙә бер төркөм кешеләрҙең торнанан килеп сығыуына нигеҙләнгәндәре бар. Үҫәргән башҡорттары торнаны тәүбаба иҫәпләй. Ҡара табындарҙың легендалары һөйләүенсә, уларҙың ырыуына нигеҙ һалыусы тәүбабаһы - ҡара башлы ҡарабуҙ төҫтәге торна була. В. Васильев менән С. Шитова ҡара табын этнонимын самодий телдәре нормаларынан сығып, торна-табындар тип аңлата. Ненец һәм энец телдәрендә "харе" ("ҡара") торна тигәнде белдерә. Әгәр ҙә был шулай икән, ҡара ҡыпсаҡ, ҡара ҡатай һәм ҡара танып тигән башҡорт ырыуҙарын "торна ҡыпсаҡтар", "торна ҡатайҙар", "ҡара таныптар" тип аңларға кәрәк. Башҡорт ырыуҙарының исемлегендә торна ҡатай тигән атама ла бар. Торна тигән ырыу-аралары бөрйәндәрҙә, гәрәй-ҡыпсаҡтарҙа, үҫәргәндәрҙә, түңгәүерҙәрҙә, күбәләк табындарҙа, ҡара табындарҙа, әйләләрҙә осрай. "Терһәк" этнонимында ла "торна" һүҙе ята, фин-уғыр телдәрендә был "торна халыҡ" тигәнде белдерә. Хәйбулла районы Аҡъяр ауылының ололары хәтерләүенсә, Йылайыр районы Һабыр ауылы балаларын элегерәк гел генә торна балалары тип йөрөтөр булғандар. Башҡорттар оҙон буйлы, оҙон аяҡлы матур ҡыҙҙарҙы юҡҡа ғына торна тип атамағандарҙыр, моғайын.

Халыҡ ижадында торнаның кешенә килеп сығыуын аңлатҡан өлгөләр ҙә бар. М. Сәғитов эштәрендә ҡурайҙа оҫта уйнаған егеттең һауаға ашып, һауа торнаһына әүерелеүен, ә ерҙә ҡалған торналарҙың уның нәҫеле булыуы тураһында һөйләгән легенда бар.

Билдәле булыуынса, тотем ҡошто үлтерергә, уның итен ашарға ярамай. Йола ҡанундары буйынса, үҫәргән, ҡыпсаҡ, бөрйән, меңле, гәрәй, уран, танып, үпәй, ғәйнәләрҙә торнаға ҡул күтәрергә ҡушылмай. Әгәр ҙә ни сәбәптәндер яуызлыҡ ҡылына икән, был кеше һәр ваҡыт язаһын ала. Торналар оя ҡорған урын да изге һанала. Торнаның итен ашау ҙа тыйылған ғәмәл. С. Руденконың үҫәргәндәрҙән яҙып алған "Хәйләкәр ҡарт" әкиәтендә йәш ҡатын ҡарт ирен һаңғыраунаһуҡыр итеү өсөн сихырсы кәңәше буйынса, торна ите менән һыйлай. Борай районында яҙып алынған тағы бер сюжетта йәш егет торна атып ала һәм ике көн бешерһә лә, ите бешеп сыҡмай.

Торналарҙың ҡурылдауын да тыңларға ярамай, тиҙәр. XIX быуаттың аҙағында С. Рыбаков яҙып алған "Сыңрау торна" легендаһының бер вариантында шул әйтелә: "әгәр ҙә кем дә кем торна йырлауын ишетә һәм күрә, ышаныуҙар буйынса, тиҙҙән мәрхүм буласаҡ. Башҡорттарҙың һүҙенә ҡарағанда, халыҡ был көйҙө лә тыңларға яратмай, сөнки йырҙа һөйләнелгән торналар йыр йырлаған урында элек һуғыш йәки ҡоролоҡ булған".

Үҫәргән, бөрйән, ҡыпсаҡ, теләү-табын ырыуҙарында торна булып ҡысҡырыу, бейеү элементтары һаҡланған. Былар барыһы ла торнаға бағышланған ниндәйҙер тотемик байрам булыу ихтималлығы хаҡында ла һөйләй.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*

# БАЛАҒЫҘ МӘКТӘПКӘ БАРЫРҒА ТЕЛӘЙМЕ?

**Ял көнө баҙарҙа танышымды осраттҡайным. Беренсегә уҡырға барасаҡ ҡыҙына кейем-һалым ҡарарға сыҡҡандар. Мәктәпкә барырға әҙерләнеү һәм, әлбиттә, яңы кейем алыу балалар өсөн, ғәҙәттә, байрам кеүек була. Һәр хәлдә, минең хәтерҙә шулай ҡалған. Тик танышымдың да, ҡыҙсығының да шыпа кәйефтәре юҡ: әсәһе көйгән, балаһы балауыҙ һыҡҡан-күренеп тора.**



- Оҡшатмаймы әллә? - тип һорайым ҡатындың ҡулындағы форма-алъяпҡыстарға ымлап.

- Уҡырға барғыһы килмәй, - тип аптырата әсә.

- Ниңә икән, - тим, - бәлки, берәй сәбәбе барҙыр?

- Ниндәй сәбәп? Ялҡаулыҡ. Белмәйем, ҡалайтып уҡылыр бының менән...

Ошо хаҡта ҡыҙыҡ күреп, икенсе танышыма һөйләһәм, ул: "Ниңә аптырайһығыҙ, хәҙер беренсегә атлығып барған балалар һирәк ул", - тимәһенме. Шул ваҡыт "Туҡта, бәләкәстәрҙең үҙҙәре менән һөйләшеп ҡарайым әле", тип уйлап, күрше-тирәләге беренсе класҡа барыусы - ике, икенсегә күсеүсе бер бала менән аралаштым. Өс баланың берәүһе бөтөнләй уҡырға теләмәй, икенсеһе теләкһеҙ генә риза, өсөнсөһө иһә "яҙмышына күнгән" булып сыҡты. Ете йәшлек Алтынай менән һөйләшеү түбәндәгесә булды:

- Алтынай, мәктәпкә бараһың икән, ҡотлайым!

- ... (Бала өндәшмәй, һағая)

- Бишкә генә уҡыйһың инде, эйе бит?

- ... (Бала нимәнелер әйтә алмауҙан уңайһыҙланып, башын яурын эсенә тарта).

- Ниңә өндәшмәйһең, әллә уҡығың килмәйме? - баҙнатһыҙланмаһын өсөн икенсе нәмәләрҙе күҙәткән булып, шаярған шикелле һорайым.

- Килмәй! - ҡыҙыҡайҙың тауышында шатлыҡ осҡондары сағылып китә хатта.

"Ни өсөн?" тигән һорауҙы бирергә теләр уҡыусы ошо ваҡытта. Һәм, әлбиттә, иң беренсе мәктәпте һәм уҡытыусыларҙы ғәйепләргә теләр. Тороп торайыҡ әле, тип өндәшке килә шул мәл, кемдәрҙелер әрләр алдынан иң башта балабыҙҙың эске донъяһына һәм уның тирәләй үҙебеҙ яһаған тышҡы донъяға иғтибар итәйек.

Психологтар тикшереүенсә, өйҙә артыҡ иркәләтеүгә күнгән балалар мәктәпкә атлығып бармай, хатта унда йөрөүҙән бөтөнләй баш тарта. Сөнки ошо йәшендә мәктәптең балалар баҡсаһы түгеллеген һәм ниндәйҙер талаптар буласағын аңлай. Өйҙә иһә ул бәләкәй генә диктатор, уның теләктәре беренсе сиратта. Ә инде ғаиләлә һаман бәләкәс итеп күрелгән йәки ололар тарафынан артыҡ һанға һуғылып бармаған балалар, киреһенсә, үҙҙәрен ҙур итеп күрһәтеү, үҙ аллы булыу теләгенән мәктәпкә тартыла икән. Был тәңгәлдә, әлбиттә, психологтар бәләкәстәрҙең яңылыҡтан ҡурҡыу, ояллыу кеүек тәбиғи хис-тойғоларын да күҙ уңынан ысҡындырмай.

Күп осраҡта баланың мәктәп хаҡындағы аллы-гөллө, йәйғорло хыялдары беренсе аҙна белем эстәүҙән һуң уҡ юҡ була. Әлегә кемдең кемлеген һәм нимәнең нимәлеген аңлап етмәгән балалар ололар тарафынан баһалана һәм был баһа уларға статус бирә. Уҡытыусы уларҙың аң-белемен маҡтау-хуплау, йондоҙ, ҡағыҙға эшләнгән "бишле" һүрәте менән билдәләй. Ә бала өсөн коллективта айырым статус тотоу бик мөһим икән. Улар "урынһыҙ" ҡалыуҙы ололарға ҡарағанда күпкә ауырыраҡ кисерә һәм был кире кисерештәр мәктәптән өркөүҙең беренсе сәбәпсеһе була ла инде. Был тәңгәлдә күп нәмә уҡытыусының тәжрибәһенән һәм психологик алымдар ҡуллана белеүенән тора.

Теге йәки был конфликт менән йөҙгә-йөҙ бәрелешеп өйрәнмәгән балалар ҙа мәктәптән ҡурҡырға мөмкин. Ата-әсә бәләкәйҙән баланың алдына төшөп, барыһын да үҙе башҡарып йөрөгәндә ул йәштәштәре менән аралашыуҙа ла, эш эшләүҙә лә, уҡыу-яҙыуҙа ла ололарҙан ярҙам көтөп кенә ултырасаҡ. Ҡасандыр бер әсәй балаһын баҡсаға алып килеп ҡалдырғанда көн һайын тәрбиәсене "тәрбиәләп" аптырата торғайны. "Минең ҡыҙыма бойороулы тонда өндәшмәгеҙ - үпкәләй, "зинһар өсөн" тигән һүҙҙе йыш ҡулланығыҙ, мәскәй әбей булған әкиәт һөйләмәгеҙ - ҡурҡа, иң ситкә ултыртмағыҙ - күңеле төшә һ.б." Хатта динозавр тураһында мультфильм күрһәткәндәре өсөн мөдиргә барып етте, йәнәһе, ҡыҙы артыҡ хисләнеп йоҡлай алмай ятҡан. Һуңынан ул бала һәм ата-әсә менән уҡытыусының нисек ыҙаларын күҙ алдына килтерегеҙ инде. Бала бер ниндәй конфликтҡа ла әҙер түгел, бәләкәй генә стресты ла кисерә алмай. Әлбиттә, ул мәктәптән ҡурҡа.

Беренсе кластарҙың белем эстәргә теләмәүенең тағы ла бер сәбәбе - белем. Мәктәптә өйрәнә торғанды улар инде балалар баҡсаһының һуңғы баҫҡыстарында иләп-һуғып бөткән. Түңәрәк-шаҡмаҡтарҙы ғына түгел, хәрефтәрҙе лә, һандарҙы ла уҡый-яҙа беләләр. Яңылыҡ юҡ бында улар өсөн, ҡыҙыҡ түгел. Ярты синыф яҙа белмәгән яртыһының өйрәнгәнен көтөп ултырып ялҡаулана, көс һалып уҡыуҙан ситләшә. Ә теге ярты белгән яртынан кәм булыуын тойоуҙан баҫыла, йомола. Тимәк, балалар баҡсаларының уҡыу программаһын бер аҙ еңеләйтергә кәрәктер. Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, уларҙың расписаниеһы мәктәптекенән бер ҙә ҡайтыш түгел. Күберәк уйнар, йүгерер-шаярыр урынға сабыйҙар парта артында ултыра. Күрһәткестәр артынан ҡыуып, балалар хаҡында онотоп ебәрәләр, ғәҙәттә.

Тағы ла бер ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та факт - компьютер уйындары менән мауыҡҡан бәләкәстәр менән реаль донъя араһында психологик кәртә барлыҡҡа килә икән. Уларҙың башын тулыһынса шул уйын мажаралары биләп ала һәм ҡабаттан шунда инеү өсөн бөтөн башҡа эштәрен этеп-төртөп, ашығып башҡарырға ғәҙәтләнәләр. Шул уйындарҙағы ҡылыҡтарҙы, һүҙҙәрҙе ҡабатларға ынтылалар, илке-һалҡылыҡҡа, яуапһыҙлыҡҡа өйрәнәләр.

Шулай уҡ балала нимәгәлер теләк уятыуҙың иң ябай төрө - үрнәк күрһәтеүҙәлер. Ата-әсәнең көн дә иртән тороп яҡшы кәйеф менән эшкә киткәнен күреп үҫкән балалар, ғәҙәттә, үҙҙәре лә һөнәр һайлау хаҡында бәләкәйҙән үк уйлана башлай. Ошо урында бер миҫал: ата-әсәһе эшләмәй ятҡан ғаиләнең балаһы беренсе класҡа уҡырға барғас, көн дә иртәнсәк "Бармайым! Һеҙ икегеҙ ҙә рәхәтләнеп йоҡлайһығыҙ, мине генә таң менән сығарып ебәрәһегеҙ", тип, күрше-тирәһе ишетерлек ғауға ҡуптара икән. Дөрөҫ әйтә малай, ниңә ғаиләлә бер ул ғына тир түгергә тейеш? Кем әйтмешләй, ояһында ни - осҡанында ла шул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үрҙә һанап үтелгәндәр баланың мәктәпкә барыу теләген һүндереүсе, дөрөҫөрәге, уны бөтөнләй булдырмаусы сәбәптәрҙең бер нисәүһе генә. Шунлыҡтан, уҡыу дәрте булмаған бәләкәстәр алдына "Ни өсөн?" тигән оло һорауҙы ҡуйыр алдынан сәбәптәрен үҙ аллы асыҡлап ҡарағыҙ. Ни генә тиһәң дә, уҡыу - энә менән соҡор ҡаҙыу һәм ул соҡорҙо ҡайыш ярҙамында күпме генә соҡоторға була. Шулай уҡ ул ҡоҙоҡтан һыу сығыуы ла мөһим, һыуһыҙ унан ни фәтүә. Ниндәй генә заманалар килеп, уҡыуҙың хаҡы төшөп киткәндәй булһа ла, белемле, ғилемле булыуға бер ни етмәй. Был хәҡиҡәтте иртәгә мәктәпкә барасаҡ балаға аңлатыу мөмкин түгел, быны ваҡытында ата-әсәләрҙең төшөнөүе зарур. Сөнки тыуған илгә, туған телгә, үҙҙәренә һәм шул теҙмәгә инеп китер белем алыуға хөрмәт һәм һөйөү уятыу уларҙың бурысы.**

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

✓ *Колхоз ҡортсолоғон ойоштороу һәм нығытыу менән башҡорттарҙа йәйләп боронғо ысулдарҙы ҡыҫырыҡлап сығарыу башлана, яһалма күс айырыу һәм тиҙ үрсеү ысулы киң ҡулланыла.*



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

**Билдәле булыуынса, Урта быуат сығанаҡтарының бер төрө булып карталар тора. Бигерәк тә Көнбайыш Европа илдәрендә эшләнгән карталар йәки уларҙың йыйынтыҡтары ҡыҙыҡлы. Быйыл шул иң тәүге географик атластарҙың береһе - бөйөк фламанд картографы Абрахам (Авраам) Ортелийҙың (Ортелиус) (1527-1598) карталар йыйынтығы нәшер ителеүенә 445 йыл тула.**

# ОРТЕЛИЙ КАРТАҺЫ НИ҆ҺӨЙЛӘЙ?




Абрахам Ортелий 1527 йылда Антверпен ҡалаһында тыуа һәм ғүмере буйы шунда йәшәй. Ул йәштән үк географик карталар менән ҡыҙыҡһына, һәр урында ла уларҙың тик яңыларын һәм иң яҡшыларын ғына үҙендә ентекләп туплай башлай. А. Ортелий 1564 йылда һигеҙ биттән торған - донъя, ә 1567 йылда ике бит тәшкил иткән Азия карталарын әҙерләй. Унан һуң Абрахам Ортелий бөтә карталарҙы бер форматта әҙерләп, географик карталар йыйынтығы итеп, 1570 йылдың 20 майында Антверпенда "Theatrum Orbis Terrarum" ("Ер йөҙө күренештәре", "Донъя театры") исеме аҫтында баҫтырып сығара. Ул атластың 53 битендә 70 карта һүрәтләнгән. Атласта дөйөм Европа, Америка, Азия, Африка һәм айырым илдәрҙең карталары бирелгән. Атластың аҙағында автор алфавит буйынса географик атамалар исемлеге килтергән. Әйтергә кәрәк, нәшер ителгәс, А.Ортелийҙың атласы бик популяр булып китә һәм шул уҡ 1570 йылда ул тағы ла бер тапҡыр баҫылып сыға. Ул карталар йыйынтығы 1612 йылға тиклем төрлө телдәрҙә 40 тапҡырҙан артыҡ нәшер ителә.

Абрахам Ортелий атласында Башҡортостан иле күрһәтелгән. Йыйынтыҡтың бер-нисә картаһында Каспий диңгеҙе (Mar de Bachu, olim Mare Caspium, et Hyrcanum), Волга (Volga vel Edel fl.), Яйыҡ йылғалары (Yaick fl.), Ҡаҙан (Casan), Әстерхан (Astracan), Болғар (Bulgar), Башҡортостан, башҡорттар (Baschirdorum horda) һәм башҡалар сағылдырылған.

Шунылы ҡыҙыҡлы: карталарҙа, йәғни Азия картаһында башҡорттар урынлашҡан урын "башҡорт" яҙыуы менән генә түгел, ә "Башҡорт урҙаһы" (Baschirdorum horda) формаһында бирелгән! Ни эшләп шулай һуң? Үрҙә әйтеп киткәйнек инде - Абрахам Ортелий атласты туплағанға тиклем бик күп карталар менән таныша, уларҙы ентекләп анализлай. Күрәһең, ул сығанаҡтарҙа башҡорттар үҙ дәүләтселегә булған халыҡ булараҡ билдәле булғандыр һәм ул факттар беҙҙең көндәргә тиклем килеп етмәгән сығанаҡтарҙа, шул иҫәптән ҡайһы бер боронғо карталарҙа ла, моғайын, сағылғандыр.

"Ordu" һүҙенең этимологияһына килгәндә, ул һүҙҙең иң боронғо мәғәнәһе - "хан лагеры", "хан станы". Ә инде "хан ставкаһы (резиденцияһы)" мәғәнәһендә "Orda" формаһы юҡ, тик төркмән, үзбәк һәм ҡыпсаҡ телдәрендә "Orda" (башҡортса "Урҙа") формаһы бар (Севортян Э.В. Этимологический словарь тюркских языков. М., 1974. - 470-472 б.; Древнетюркский словарь. Л., 1969. -370 с.).

Билдәле булыуынса, рус сығанаҡтарында ла башҡорт илен төрлө формаларҙа күрһәтәләр: "земля Башкирская" (Московский летописный свод 1479 год), "Беловоложская земля" (Белая Воложка (рус.) - Ағиҙел атамаһынан), "Башкирь", "Башкирда". Әммә иң мөһиме шунда: ҡайһы бер рус яҙмаларында Башҡортостанды "Башкирская орда" тип атайҙар. Был хаҡта "Орда" - "в древности у тюркских кочевых народов род государственного объединения", тип аңлатма бирә күренекле рус телсеһе Сергей Иванович Ожегов (Ожегов С.И. Словарь русского языка. М., 1973 - 418 с.).

Шулай итеп, Абрахам Ортелийҙың бынан 445 йыл элек донъя күргән "Theatrum Orbis Terrarum" (1570) атласында башҡорт халҡы йәшәгән урын ғына түгел, ә ул халыҡтың дәүләте - "Башҡорт урҙаһы" ла һүрәтләнгән.

**Айбулат ПСӘНЧИН, география фәндәре докторы.**

*АРХИВ КӘШТӘҺЕНӘН*

# БЕҘҘЕҢ КӨНИТМЕШЕБЕҘ...

## Маркстың ла ҡыҙыҡһындырған

**Карл Маркс ғүмеренең һуңғы йылдарында китапханаһындағы урыҫ китаптары исемлеген төҙөгән. Был исемлеккә башлыса статистик белешмәләр, йыйынтыҡтар индерелгән.**

Башҡортостан тураһында ла китаптары булған уның. 102-се һан тәңгәлендә Л. Сабанеевтың "Очерки Зауралья и степное хозяйство на башкирских землях" тигән китабы яҙылған. Был китап 162 биттән тора. Ун туғыҙ битендә Карл Маркс ҡара ҡәләм менән үҙ билдәләрен ҡуйған, һүҙ-һөйләмдәрҙең аҫтына һыҙған. Китап авторы төп халҡын башҡорттар тәшкил иткән Урал райондары тураһында бәйән итә.

Исемлектәге 25-се һан аҫтында "Уральское горное хозяйство и вопрос о продаже казенных горных заводов. Исследование В.П. Безобразова" тигән китап бар. Автор, Фәндәр Академияһының ғәмәлдәге ағзаһы, 1867 йылда Уралдың иҡтисади хәлен тикшергән, Өфө, Златоуст, Благовещенск, Бөрө заводтарында булған. Тау-завод сәнәғәте көрсөгөн үҙ күҙҙәре менән күреп ышанған, халыҡтың фәҡир йәшәүенә шаһит булған. Әммә бының сәбәптәрен өйрәнмәгән.

Маркстың Башҡортостан тураһындағы китаптан күсереп яҙып алған ҡулъяҙмалары ла бар. Ул, мәҫәлән, Өфө губернаһында эре мал башлыса һуйып һатыу өсөн аҫырала, тип яҙған. Ауыл хужалығында, крепостнойлыҡ хоҡуғы ҡалдыҡтары ҡалған булһа ла, капитализмдың үҫә барыуы тураһында дәлилләгән.

Маркс Уралда яңы заводтар һәм фабрикаларҙың хасил булыуын күҙәткән. Ошо китаптарға һәм башҡа сығанаҡтарға таянып, Рәсәй иҡтисадының үҙенсәлегенә төшөнгән, крепостнойлыҡ һәм буржуаз мөнәсәбәттәрҙең бер-береһенә үрелгәнлеген аңлаған.

Маркс һәм Энгельс башлаған тикшеренеүҙе дауам итеп, В.И. Ленин үҙенең "Развитие капитализма в России" тигән китабында Уралдың артта ҡалыуының социаль һәм иҡтисади сәбәптәрен асҡан.

Дәһшәтле һуғыш йылдарында Карл Маркстың бөтә донъяла танылыу алған "Фонд 1" тигән ҡулъяҙмаларын Башҡортостандың баш ҡалаһына һаҡлау өсөн ебәрәләр. Бөтә документтар ҙа һаҡланып ҡалған, ә "Фонд 1" яңы документтар менән тулыландырылған.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Тау-урманлы ерҙә йәшәгән башҡорт бал ҡортонан тыш, Башҡортостанда икенсе төр - ҡара ҡорт та киң таралған. Ул түмәрҙәрҙә ҡышлауға ҡулайлашмаған, улар өсөн революцияға тиклем дә баҙҙар эшләнгән. Шуға күрә төньяҡ-көнсығышта һәм айырым колхозсыларҙа бик йыш рамлы умарталар ғына осрай (**һүрәт**).



Әле күптән түгел генә Башҡортостандың ҡортсолоҡ хужалығында йүкә сәскә атыуға дөйөм көйләнеш ҡуйылһа, йүкә йыл һайын нектар бирмәгәнлектән, бал йыйыу көтөлгәнсә тәьмин ителмәй. Шуға күрә колхоздарҙың бер өлөшө ҡарабойҙай һәм туҡранбаш сәсеүҙән тыш, ҡандала үләне, фацелия һәм башҡа баллы үләндәрҙе сәсә башлай.

Техника түбән булғанлыҡтан, бай һәм төрлө бал флораһы булыуға ҡарамаҫтан, түмәр ҡортсолоҡ элек юғары һәм тотороҡло уңыш бирмәй. Колхоз ҡортсолоғон ойоштороу һәм нығытыу менән башҡорттарҙа йәйләп боронғо ысулдарҙы ҡыҫырыҡлап сығарыу башлана, яһалма күс айырыу һәм тиҙ үрсеү ысулы киң ҡулланыла. Башҡорттар өсөн яңы булған умартасылыҡ техникаһы күстәрҙең продуктлылығын һиҙелерлек күтәрә.

Колхоздарҙа балыҡсылыҡ сәнәғәте айырым балыҡ тотоу артелдәре ойоштора һәм балыҡсыларҙы тейешле ҡорамалдар менән тәьмин итә. Төп балыҡ тотоу ҡоралы булып элекке кеүек үк 200-300 метр оҙонлоҡтағы йылымдар тора. Йылғаларҙа балыҡты йылым менән һөҙәләр. Шулай уҡ һәр ерҙә мурҙа менән тотоу ҙа киң таралған.

Ҡышын балыҡ тотоу өсөн боҙҙа мәке уйып, ике көн алдан балыҡҡа ашарға һалалар, уға эреле-ваҡлы балыҡ йыйыла. Нигеҙҙә һыла, ҡорман, шүкә, онто балыҡтарын тоталар. Күлдәрҙә - алабуға, табан балыҡ һ.б. Каспий диңгеҙенән ыуылдырыҡ һалырға Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғаларына ингән стерлядь, бикре, белорыбица һәм ҡырпа балыҡтарын тоторға рөхсәт ителмәй.

Колхоз гидроэлектр станциялары төҙөлөү менән бик күп яһалма һыу сығанаҡтары барлыҡҡа килә. Ҡайһы бер урындарҙа быуалар ҙур күлдәргә әйләнә. Уларҙа сазан һәм алабалыҡ үрсетәләр. Ҡайһы бер колхозсылар балыҡты ҡармаҡ менән тота, бигерәк тә ҡышын, мәкеләргә мурҙа ҡуялар. Яҙғыһын, ыуылдырыҡ сәсеү ваҡытында шүкәләрҙе боронғоса һалдау менән йәки мәскәүләп тоталар.

Ҡоштарға һунар һәм ҡиммәтле тиреле хайуандарға һунар менән хәҙерге ваҡытта аҙ шөғөлләнәләр. Һуйыр, ҡор, сел һәм өйрәктәрҙе атып алалар. Төлкөнө, ҡуяндарҙы ҡапҡанға аулайҙар. Бик һирәк ҡапҡанға ҡама ла эләгә. Ҡайһы бер таулы-урманлы районда ҙа (Маҡар, Белорет, Йомағужа) һуңғы ваҡытта бик күп һыуһар үрсене, уларҙы атып алалар йәки эт менән аулайҙар. Таҙы тоҡомло эттәр менән хәҙер төлкөгә һәм ҡуянға һунар итәләр (Әбйәлил, Баймаҡ районлары). Шәшкене эттәр һәм ҡамас менән аулайҙар, аҫтарҙы черкандар менән. 1936 йылда Белорет һәм Бөрйән райондарына Америка шәшкеһе ебәрелә һәм ул үрсеп, урындағы йылғалар буйлап тарала. 1948 йылдан уны Бөрйән районында уларҙы махсус ҡамастар ярҙамында тоталар. Хайуандар тере килеш, бер зарарһыҙ эләгә. Тотолған хайуандар күрше таулы-урманлы райондарға үрсетергә ебәрелә. Ҡайһы бер колхоздарҙа хайуандар фермалары бар, уларҙа ҡара төлкөләр уңышлы үрсетелә.

***✓ Башҡорт драматургияһы ауыл тормошон ғына күрһәтергә тейеш тигән фекер бар. Тик был осраҡта үҫеш булмаясаҡ. Бер ҡасан да тамашасының теләгенә эйәрергә ярамай, театр уны тәрбиәләргә тейеш.***

# ҺӨНӘРЕБЕҘҘЕҢ

## сәхнәнең тәмен тоя

**Мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич исемендәге ижади премияға лайыҡ булыу өсөн яҡшы роль ижад итеү, һүрәт төшөрөү, көй сығарыу ғына етәме? Был премияға дәғүә итеүсе ижадтағы уңыштарынан тыш, тағы ниндәй талаптарға яуап бирергә тейеш? Таңсулпан Ғарипованың "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға" мюзиклындағы Ҡара юрға, Маҡтымһылыу һәм Мәсем хан ролдәре өсөн Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһына дәғүә итеүселәр - М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актерҙары Руслан Хайсаров, Ирада Фазлаева һәм Урал Әминев менән ошо юҫыҡта әңгәмәләшәбеҙ.**

**► Бөгөнгө заманда тормоштоң бөтөн өлкәләрендә - иҡтисадта, сәйәсәттә, көнкүрештә генә түгел, кешеләрҙең аңдарында ла үҙгәрештәр бара. Бындай шарттарҙа сәнғәт тә үҙгәрешһеҙ ҡала алмай. Милли профессиональ сәнғәттең киләсәген нисегерәк күҙаллайһығыҙ?**

**Урал Әминев:** Дөйөм милли сәнғәт тураһында һүҙ йөрөткәндә, һис шикһеҙ, ул үҙенең милли тамырҙарын, милли үҙенсәлеген һаҡлап алып ҡалырға бурыслы. Ә бына театрҙа тамашасы бөгөнгө заманға ауаздаш спектаклдәр күргеһе килә. Театр заман менән бергә атларға тейеш, юҡҡа ғына: "Театр - ул тормоштоң көҙгөһө", - тип әйтмәйҙәр. Шуға тормош үҙгәрә икән, театр ҙа үҙгәрә, тик ул бер ҡасан да заманды бар кире яҡтары менән ҡабул итеп, уға яраҡлашып, унда иреп юғала алмай. Театрҙың үҙенең тәғәйенләнеше бар - заманалар ниндәй генә булмаһын, ул кешеләрҙе үҙе артынан изгелеккә, яҡтылыҡҡа алып барырға тейеш. Әгәр ҙә бөгөнгө заман кешеһе аҡса өсөн намыҫын аша атлап үтергә риза икән, театр сәхнәһендә бындай кешеләр бер ҡасан да герой була алмай.

**Ирада Фазлаева:** Урал дөрөҫ әйтә, театр замандан артта ҡала алмай. Әммә репертуарҙы заманса спектаклдәр менән генә тултырырға ла ярамай. Сөнки беҙ - милли театр, беҙ милли сәнғәткә хеҙмәт итәбеҙ. Миңә, мәҫәлән, беҙҙең театрҙың репертуары бик оҡшай. Унда матур фольклор әҫәрҙәре күп, тап улар йәш быуынды халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары менән таныштыра. Шуға ла заман башҡа, тип, милли театр тулыһынса үҙгәрергә тейеш тә түгелдер ул. Заман менән бергә барыу тигәндә, башҡорт театрының дөйөм театр сәнғәте менән бергә үҫешә алыуын күҙ уңында торорға кәрәктер. Һәр ваҡыт хәрәкәттә булырға тейеш театр, был драматургҡа ла, режиссерға ла, актерҙарға ла ҡағыла.

Бөгөн бит кинотеатрға ла барғы килмәй, телевизор ҙа ҡарап булмай, сөнки уларҙан тик кире энергия ғына алаһың, ҡайҙа ҡарама - һуғыш, һәләкттәр, киноларҙа ла шундай уҡ фажиғә күрһәтелә. Ә театрҙа бөтөнләй икенсе хистәр кисерәһең, ул ыңғай тойғоларҙан туҡылған. Халыҡ телевизорҙан барған идеологик һөжүмдән арып, башына бер аҙ ял биреү өсөн дә театрға килә. Донъяны яҡшылыҡ, матурлыҡ ҡына ҡотҡара аласаҡ, шуға ла театрҙың киләсәге яҡты буласаҡ, тип иҫәпләйем.

**Руслан Хайсаров:** Ысынлап та, театр - ул юғары сәнғәт. Йәштәр ҙә берәй заман интернетта "йәшәүҙән", төнгө клубтарҙа ял итеүҙән арып, театрға киләсәк барыбер. Репертуар ҙа киләсәккә, тимәк, йәш быуынға ла төбәп һайлана. Яңыраҡ ҡына Баязит Бикбайҙың "Ҡаһым түрә" әҫәре сыҡты сәхнәгә, Рәми Ғарипов, Әхмәтзәки Вәлиди кеүек шәхестәрҙе күрһәткән спектаклдәргә лә халыҡ күп йөрөнө. Башҡорт халыҡ ижады өлгөләре нигеҙендә ҡуйылған "Шәүрәкәй", "Ҡоҙаса", "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға" оҡшамай һәм күңелегеҙ заманса драматургия һорай икән, "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр" драмаһын ҡарай алаһығыҙ.

**► "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр" драмаһын тамашасы, нисектер, һағайып ҡабул итте кеүек. Заманса авторҙар, заманса драматургия кәрәк, тип күп ҡыҫҡырабыҙ, ә шул уҡ драманың авторы Я. Пулиновичтың әҫәрҙәре бөгөн Рәсәй театрҙарында ҙур һорау менән файҙаланылһа ла, ни өсөн башҡорт тамашасыһы уны үҙ итә алмай һуң?**

**Урал Әминев:** Башҡорт драматургияһы ауыл тормошон ғына күрһәтергә тейеш, тигәнерәк фекер бар шул. Эйе, күптәребеҙ ауылдан сыҡҡан, ҡалала йәшәһәк тә, тыуған ауылыбыҙҙы өҙөлөп һағынабыҙ, ундағы мут ҡарттар, шаярыуҙар беҙгә шул тиклем таныш, яҡын. Бәлки, сираттағы тапҡыр ошоларҙы күреп, көлөп ҡайтыуы тамашасыға оҡшайҙыр. Тик был осраҡта үҫеш булмаясаҡ. Бер ҡасан да тамашасының теләгенә эйәрергә ярамай, театр уны тәрбиәләргә тейеш.

**Ирада Фазлаева:** Һәр халыҡтың үҙ менталитеты, шуға бәйле теге йәки был мәсьәләгә үҙ ҡарашы, хатта ниндәйҙер хәлдән сығыуҙың да үҙенсә ысулдары була. Әммә әлеге әҫәрҙә күтәрелгән проблема беҙҙең халыҡта юҡ, тип әйтеүҙән генә ул юҡҡа сыҡмай. Беҙҙең йәмғиәттә лә эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән, аҡса эшләгән көслө характерлы гүзәл заттар бар ҙа инде. Унан һуң, бында бит иң мөһиме - героиняның эске кисерештәре. Спектаклдең тышҡы күренешен, сюжетын ғына күҙәтһәң, әлбиттә, ул һиңә оҡшамауы ла бар.

**Руслан Хайсаров:** Кешене шул уҡ комедия ла уйландыра, ниндәйҙер һорауҙарға яуап бирә ала. Ниндәйҙер тетрәнеү, рухи таҙарыныу кисерһә генә тамашасы спектакль менән ҡәнәғәт ҡала, минеңсә. Бәлки, шундай тетрәнеү етмәгәндер тамашасыға. Һәр хәлдә, был хаҡта тамашасының үҙенән һорарға кәрәк. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, гәзиттәрҙә, телевидениела театрҙарыбыҙҙа ҡуйылған спектаклдәр тураһында фекер алышыуҙар ойошторолмай бит хәҙер.

**► Быйыл Әҙәбиәт йылы, Бабич та халҡыбыҙҙың ялҡынлы шағирҙарының береһе. Әҙәби әҫәрҙәр менән ҡыҙыҡһынаһығыҙмы, актер өсөн китап уҡыу нимә бирә?**

**Урал Әминев:** Күңелеңде байытыу өсөн китап уҡыу мотлаҡ кәрәк. Башҡорт әҙәбиәтен генә түгел, донъя әҙәбиәтен уҡыу, яңы әҫәрҙәр менән ҡыҙыҡһыныу һәр кешегә сикһеҙ рухи байлыҡ бирә. Тик әлеге мәлдә китапты күп уҡыйым, тип маҡтана алмайым. Ниндәйҙер эске күңел торошо менән бәйлеме, ҡыҙыҡһыныуҙарым бер аҙ үҙгәрҙе. Ваҡытым булһа, дуҫтар менән сәйәхәт итергә тырышам. Насар ғәҙәттәр менән дуҫ булмаған бер төркөм йәштәр бергә тупланып алдыҡ та, Башҡортостандың тауҙарын, мәмерйәләрен, шарлауыҡтарын, йылға-күлдәрен барып күреп, әүҙем ял итәбеҙ.

**Ирада Фазлаева:** Ҡыҙыҡһыныуҙарҙың үҙгәреп тороуы ла яҡшы. Элегерәк кино ҡарауға, китаптар уҡыуға күберәк күберәк ваҡыт бүлһәм, бөгөн мин кешеләр менән йышыраҡ аралашам. Мәскәүҙә Щепкин исемендәге училищела бергә уҡып ҡайтҡан курсташтар менән ныҡ татыубыҙ, бергә ял итергә яратабыҙ. Тик бер мәл минең театрҙан, театрҙағы дуҫтарҙан тыш та тормошом булырға тейешлеген аңланым. Йәғни, тормоштоң башҡа яҡтарын өйрәнә, башҡа кешеләр менән аралаша башланым. Ярҙамға мохтаждарға хәйриә ярҙамы күрһәтеү менән дә шөғөлләнәм.

**Руслан Хайсаров:** Өфө дәүләт сәнғәт академияһында уҡығанда уҡ күп уҡырға өйрәнгәйнем. Хәҙер ҙә көн һайын уҡырға тырышам. Әлеге мәлдә рус әҙәбиәте классигы Ф. Достоевскийҙы ҡабаттан уҡыйым, һәр йәштә әҫәр төрлөсә ҡабул ителә, һәр ваҡыт яҙыусыны яңыса асаһың. Шағир һәм шәхес булараҡ, Бабичты бик ихтирам итәм, шиғырҙарын ятлайым. Былтыр, Мәҙәниәт йылында, Бабич шиғырҙарын яттан һөйләүселәр бәйгеһендә беренсе урын алдым. Бәйгенең гала-концерты халҡыбыҙҙың ике бөйөк талантына - Бабич менән Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа арналғайны. Беләһегеҙҙер, улар 1914 йылда Өфөлә күрешә. Ошо тамашала сығыш яһау, сәхнәлә генә булһа ла шаңлы яҙмышлы шәхестәр менән осрашыу мөмкинлеге тейҙе.

**Урал Әминев:** Мәскәүҙән ҡайтҡас, Зөһрә менән Таңсулпан Бураҡаевалар, тышҡы ҡиәфәтең менән Бабичҡа оҡшағанһың, һинең менән кино төшөрөргә кәрәк, тигәйнеләр. Уларҙың ярҙамы менән хореограф Сулпан Асҡарова миңә махсус бейеү һалды, "Бабич ялҡыны" тип атала ул. "Бабич байығы" тип атағы килгәйне уны, сөнки башҡорт бейеүҙәре араһында Байыҡ бейеүҙәренең төрлө варианттары йәшәй. Уларҙы бер нәмә берләштерә - бейеүсе бейегән саҡта һамаҡлап, байыҡлап бейей. Бабичтың да шиғырҙары быға тура килеп кенә тора. Ваҡытында ошо исемде ҡулланмағанбыҙ, тип үкенәм хәҙер. Бабич мандолинала уйнаған, шуға, бейеү һалынғас, мандолинала уйнарға өйрәндем. Тик бейегән саҡта мандолинала уйнау өсөн ҙур тәжрибә кәрәк, әлегә сәхнәлә икеһен бергә берләштереп башҡара алмайым. Бабич быларҙың барыһына ла маһир булған.

**Ирада Фазлаева:** Әҙәбиәт тураһында һөйләшкәндә театрҙа ойошторолған шиғриәт кисәләре тураһында ла әйтмәйенсә булмай. Артистарыбыҙҙың шиғыр һөйләү һәләтенә гел һоҡланам. Хөрмәтулла Үтәшевтың был тәжрибәһе беҙгә сәхнә телен камиллаштырырға ла мөмкинлек бирә. Тик театрҙың был матур башланғысын тамашасы ла күтәреп алһын ине. Бындай шиғыр кисәләрендә тотош коллектив тиерлек ҡатнаша, мәҫәлән, сәхнәлә 30 артист баҫып тора, ә залда тамашасының һаны унан да аҙыраҡ. Шиғри һүҙҙең көсөнә ышанмайҙармы, ваҡыттары юҡмы, бәлки, бүтән берәй сәбәптәре барҙыр.

***Театр заман менән бергә атларға тейеш, юҡҡа ғына: "Театр - ул тормоштоң көҙгөһө", - тип әйтмәйҙәр. Шуға тормош үҙгәрә икән, театр ҙа үҙгәрә, тик ул бер ҡасан да заманды бар кире яҡтары менән ҡабул итеп, уға яраҡлашып, унда иреп юғала алмай. Театрҙың үҙенең тәғәйенләнеше бар - заманалар ниндәй генә булмаһын, ул кешеләрҙе үҙе артынан изгелеккә, яҡтылыҡҡа алып барырға тейеш. Әгәр ҙә бөгөнгө заман кешеһе аҡса өсөн намыҫын аша атлап үтергә риза икән, театр сәхнәһендә бындай кешеләр бер ҡасан да герой була алмай.***

**► Актер өсөн дан-шөһрәт мөһимме? Мөһим булһа, ҡайһы ролегеҙҙән һуң һеҙгә дан ҡапыл ишелеп төштө тип уйлайһығыҙ? Данлы булып уяныу тойғоһо нисегерәк?**

**Урал Әминев:** Һис шикһеҙ, тамашасы һине таный, һин ҡатнашҡан спектаклдәрҙе ҡарарға йөрөй икән, артист өсөн был ярайһы уҡ ҙур стимул.

**Ирада Фазлаева:** Театрҙа эшләй башлауыбыҙға 8 генә йыл, шуға ла мин үҙемде данлыҡлы актриса тип әйтә алмайым әлегә. Эйе, таныпҙар, ижадың менән ҡыҙыҡһыналар, сәскәләр алып киләләр. Тик дан-шөһрәт йылдар, тәжрибә менән килә.

Яҙмышым шул тиклем мәрхәмәтле, миңә гел матур ролдәр тура килә. Һәр береһен яратып, һағынып уйнайым. "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"ла башта Маҡтымһылыу менән бер юлы Ҡолонсаҡ ролен эшләгәйнем, һуңынан Маҡтымһылыу үҙемә генә тороп ҡалды. Оҙаҡ ҡурҡып йөрөнөм, ҙур роль, поэтик образдар, улар ғәҙәти ер кешеләре лә түгел һымаҡ. Характерын аңлағас, хәҙер башынан аҙағына тиклем биреләп уйнайым. Әлбиттә, һәр роль өҫтөндә эшләгәндә лә, нимәләр етмәне, тигән тойғо ҡала, сөнки актер үҙ-үҙе менән ҡәнәғәт була башлай икән, үҫеүҙән туҡтай. Олег За-

*✓ Актер мораль һәм физик йәһәттән ныҡ, көслө булырға тейеш. Шулай уҡ, тормош тәжрибәһе лә мөһим икән. Әйтәләр бит, яратып ҡарамаған кеше мөхәббәтте уйнай алмай.*



кирович Ханов беҙгә шундай ролдәрҙе ышанып тапшырып, актерлыҡ һәләттәребеҙҙе үҫтерҙе, һәр хәлдә, был мюзикл ҙур мәктәп булды.

**Руслан Хайсаров:** Актерҙы легенда кимәленә күтәреп ярата белә беҙҙә тамашасы. "Бәхет хаҡы" спектаклен генә алайыҡ. Фидан Ғафаров менән Нурия Ирсаеваның уйнағанын ҡарар өсөн халыҡ һаман йөрөй был музыкаль мелодрамаға. Бының өсөн материал да үтемле булырға тейеш. "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға" мюзиклы сыҡҡас, журналистар миңә лә дан-шөһрәт юрап яҙҙы яҙыуын. Шаярып әйткәндә, әгәр шулай булһа, был спектаклгә билеттар артынан тамашасы сиратҡа теҙелергә тейеш ине. Шуға, әлегә дан тураһында һөйләргә иртәрәк. Ә былай Таңсулпан Ғарипованың фольклорға таянып яҙған мюзиклы жанры йәһәтенән дә яңылыҡ булды башҡорт театрында. Юрға булып уйнауы еңел булманы, башҡа геройҙар тел ярҙамында уй-ниәтен әйтеп бирһә, минең һүҙҙәрем күп түгел, Ҡара бейә менән генә аралашам. Сулпан Аҫҡарова менән пластика өҫтөндә күп эшләнек, те менән ярһыу, ҡыҙыу кеше. Шуны ышандырып эшләргә кәрәк ине. Хәҙер эске көсөргәнеш юҡ, эшләгән саҡта ауыр булһа ла, уйнауы еңел был ролде. Спектаклдә коллектив тулыһынса тиерлек ҡатнаша, тотош бер ансамбль, үҙең дә уйнайһың, шул уҡ ваҡытта ансамблде лә онотторға ярамай.

**▸ Театрға бар ғүмереңде бирергә кәрәк һәм был һөнәргә бағышланған бер көнөңдө лә йәлләргә ярамай, ти тәжри-**

рург операция өҫтәлендә үҙен йәлләп, ниндәйҙер хистәренә юл бирә алмай бит. Төрлө мәлдәр була, ҡайһы саҡта иң яҡын кешеңдең үлемен кисереп, тетрәнеп йөрөгәнеңдә лә уйнарға тура килә сәхнәлә. Әммә кәйефең булмауын да, ауырығаныңды ла тамашасы һиҙергә тейеш түгел. Яңы роль алған һайын ышанысты аҡлағы, эшләүен эшләгәс, яҡшы

вариантын төшөрөргә тейеш инек, өлгөрмәнек, Хәмит ағай Яруллин китеп барҙы, бик үкенес булды. Ошо спектаклдәге мөхит миңә оҡшай ине, сөнки уны әҙерләгән саҡта бер фатирҙан икенсе фатирға күсеп, көнкүреш мәшәҡәттәренән арып, тормоштан ныҡ баҫылып, күңелем ҡайтҡайны. Әммә ошо ситуациялар образға инергә ярҙам итте. Ысынында, мин унда бер нәмәне лә уйнаманым, минең



Абушахманов менән уйҙарым тулыһынса тап килде.

**Ирада Фазлаева:** Диуана роле - Уралдың ҙур эше булды, шул спектакль аша ул үҙен драматик яҡтан да, профессиональ йәһәттән дә көслө актер булыуын күрһәтте. Курсташтарым булһынмы, әле бергә эшләгән башҡа йәш актер булһынмы, мин һәр ваҡыт уларҙың уңышлы эштәре өсөн ҡыуанам. Русланды ла һәр роле һайын тамашасы ла, өлкәнерәк быуын актерҙары ла маҡтап, "Аһ" итеп кенә тора. Шундай ролдәребеҙ булғанға, сәхнәлә үҙебеҙҙе күрһәтеү өсөн шарттар тыуҙырғандарына ныҡ шатланам. Әйткәнем бар бит, уҡыған саҡта икенсе курсҡа тиклем һөнәремде дөрөҫ һайлаганыммы икән, тип уйланып йөрөнөм. Өсөнсө курста зиһенемә һөнәремде аңлау килде, хатта бар уҡытыусылар был үҙгәрешкә аптыраны. Хәҙер тормошомдо театрһыҙ күҙ алдына ла килтермәйем, төп героиняларҙы уйнайым, төрлө режиссерҙар менән эшләргә тура килә, был да профессиональ яҡтан үҫергә ярҙам итә.

**Руслан Хайсаров:** Ысынлап та, һөнәребеҙҙең нескәлектәренә төшөнөп, сәхнәнең тә-

# НЕСКӘЛЕКТӘРЕНӘ ТӨШӨНӨП,

## башлаған сағыбыҙ

бейеүсе Урал Мортазин ярҙам итте. Миңә ҡалһа, бик матур, үҙенсәлекле образ тыуҙы. Ошонан һуң аңланым: һүҙһеҙ ҙә тамашасыға тәьҫир итеп була.

Яратып башҡарған башҡа ролдәрем дә бар. Премияға тәҡдим ителгән Ҡара юрға роле минең һөнәри үҫешемә бер баҫҡыс булды. Уға тиклем бындай ролдәр исемлегенә "Ай тотолған төндә" трагедияһындағы Аҡъегетте индерәм. Шиғри күңелле Аҡъегет бөтөн йәһәттән минең үҙем ине.

**Урал Әминев:** Уҡыған саҡта әйтә торғайнылар: һинең күп һүҙле герой йәки төп герой булыуың бер ни түгел, сәхнәлә шым торған кешегә ҡарауы күпкә ҡыҙыҡлыраҡ. Был роль Руслан өсөн ҙур һынау булды, уның эргәһендә башҡа геройҙар нимәләр эшләп, нимәләр һөйләп торһа ла, барыһы ла Ҡара юрғаны күҙәтте. Мәсем хан ролен биреп, режиссер мине лә боҙло һыуға ташланы. Сөнки быға тиклем мин гел малайҙар, балалар ролдәрен уйнап йөрөнөм. Бында ҡапыл бабай, етмәһә, төп героиняның атаһын уйнарға кәрәк. Комик ролдәр оҫтаһы Алмас Әмиров менән бер үк роль уйнауы ла ҡыйын булыр кеүек ине. Уның менән сағыштырырҙар, тигән уй ҙа булды. Мәсем хан комик образ булһа ла, ысынында ул етди, тәбиғә-

**бәле актерҙар. Уңыш менән бергә уңышһыҙлыҡтар кисерергә лә тура киләләр, һөнәрегеҙҙән ялҡҡан сағығыҙ буламы?**

**Руслан Хайсаров:** Был донъяла бер нәмә лә - уңыштар ҙа, уңышһыҙлыҡтар ҙа, шул уҡ ваҡытта кеше лә мәңгелек түгел, барыһы ла үтә, беҙгә лә алмашҡа яңы быуын киләсәк. Шуға бөгөнгө уңыштарыңа ла, уңышһыҙлыҡтарыңа ла артыҡ ҡыуанырға ла, ҡайғырыр-

итеп эшләге килә. "Бәхет хаҡы"ндағы бәләкәй генә Зөһрә ролен ныҡ яратам, уға бар хисемде һалам, быны күргән тамашасы, ни өсөн ул тиклем йөрәгеңә яҡын алып уйнайһың, йөрәгең бөтә бит, тип хафалана. Был һөнәрҙә башҡаса мөмкин дә түгел. Сәхнәлә геройыңдың яҙмышын йәшәй

күңел торошом шундай, миңә ысынлап та ныҡ ҡыйын ине. Шулай йәйләп тәжрибә туплайһың, сынығаһың да инде.

Рудины уйнағас, ҡапыл өлкәнәйҙең, тигәндәре бар. Был роль дә ҙур ҡәнәғәтләнеү бирә күңелемә. Ҡасандыр йәшәгән ниндәйҙер шәхесте кәүҙәләндерһәң, теләһәң дә, теләмәһәң

мен тоя башлаған сағыбыҙ. Ролдәребеҙҙе күреп, абруйлы премияға тәҡдим итеүҙәре лә яҙмыштың беҙгә биргән бер мөмкинлеге. Тамашасы беҙгә үҙенең баһаһын биргән инде, шуға ла премияға лайыҡ булыусылар исемлегендә быйыл булмаһаҡ та, башҡа һәләтле коллегаларыбыҙ өсөн шат буласаҡбыҙ.

*Миңә беҙҙең театрҙың репертуары бик оҡшай. Унда матур фольклор әҫәрҙәре күп, тап улар йәш быуынды халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары менән таныштыра. Шуға ла заман башҡа, тип, милли театр тулыһынса үҙгәрергә тейеш тә түгелдер ул. Заман менән бергә барыу тигәндә, башҡорт театрының дөйөм театр сәнғәте менән бергә үҫешә алыуын күҙ уңында тоторға кәрәктер. Һәр ваҡыт хәрәкәттә булырға тейеш театр, был драматургҡа ла, режиссерға ла, актерҙарға ла ҡағыла.*

ға ла кәрәкмәйҙер. Ә бына тырышлыҡ, ҡара тиргә батып эшләү кәрәк театрҙа. Артист һөнәре үҙендә уға тулыһынса бағышлағанды ярата, был уның төп шарты.

**Ирада Фазлаева:** Һөнәреңдә саҡ ҡына ялҡаулана, еренә еткереп эшләмәй башлаһаң, ул һиңә кире яҡ менән әйләнә, тип әйтә торғайны уҡытыусыларыбыҙ. Был артист һөнәренә генә ҡағылмай. Шул уҡ хи-

алмайһың икән, һин ниндәй актер һуң? Шуға ла актер мораль һәм физик йәһәттән ныҡ, көслө булырға тейеш. Шулай уҡ, тормош тәжрибәһе лә мөһим икән. Әйтәләр бит, яратып ҡарамаған кеше мөхәббәтте уйнай алмай.

**Урал Әминев:** Тормош тәжрибәһе тигәндән, "Хәйерле иртә, Энид!" спектаклендәге Пол-Полак ролен ярата инем. Был спектаклдең телевизион

дә, ул һиңә йоғонто яһай, сөнки ул ҡасандыр йәшәгән, уның йылылығы ҡалған. Диуана ла һынылыш кисерергә мәжбүр итте. Уны нисек уйнарға кәрәклеген мин күпкә алдараҡ аңлағайным. Бер тапҡыр театрға гастролдәр менән икенсе бер театр килде лә, мин Диуананы улай уйнарға кәрәкмәй икәнен аңлап, проблеманың нимәлә икәнен күргәйнем инде. Режиссер Айрат

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн тормош даирәһенең төрлө өлкәләрендә театр етди көрсөк кисерә, тип фекер йөрөтөүселәр байтаҡ. Көн һайын спектаклдәр барған репертуарлы театрҙар ил буйынса бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалып барғанда былай тип әйтеү урынлылыр ҙа, бәлки. Әммә театр - ул хыял, был хыял менән киләсәк быуындар ҙа янасаҡ, сәхнә тип аталған мөғжизәле урын бөгөнгө геройҙарыбыҙ кеүек күп хыялыйҙарҙы үҙенә тартасаҡ әле. Йөрәктәрендә Бабич ялҡыны йөрөткән талантлы йәштәребеҙҙең Бабич исемендәге дәрәжәле исем йөрөтөүен дә күреп ҡыуанырға булһын. Сөнки тап улар башҡорт театрының бөгөнгөһө лә, киләсәге лә.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

✓ *Бикмырҙа ҡатынын ултыртып, Һарыҡташ ҡасабаһына китә. Үҙе яғыулыҡ-материалдар тейәп кире әйләнеүенә, ҡатыны баҙарҙағы эштәрен бөтөрөп, юл ситендә баҫып торған була. Тик Бикмырҙа уның эргәһенән үтә лә китә.*



## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

**Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында Урал аръяғының бөтә районларынан да студенттар йыйылған. Факультеттарҙың һәр бүлегендә лә башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытыла. Был дәрес сиктәрендә беҙ студенттар менән башҡорт теленең грамматикаһын ғына түгел, күберәк башҡорт халҡының тарихы, әҙәбиәте, мәҙәниәтенә ҡағылышлы темаларға туҡталабыҙ, төрлө йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе өйрәнәбеҙ. Телмәрҙе шымартыуҙы ла күҙ уңынан ысҡындырмайбыҙ, шуға күрә халыҡ ижады өлгөләре менән эшләйбеҙ, үҙебеҙ фольклор материалдары туплайбыҙ. Студенттарҙың төрлө төбәктәрҙән булыуы бының өсөн бик ҡулайлы. Яратҡан баҫмабыҙ "Киске Өфө"нөң был һанында төрлө райондарҙан йыйып алынған лаҡаптарҙы тәҡдим итәбеҙ.**

### "Местами дожди..."

Бер ҡарттың баҫыуы булған, ти. Ул үҙенең баҫыуына Мөстәм тип исем ҡушҡан. Бер ваҡыт ҡарт баҫыуына барыр алдынан радиоһын ҡабыҙа, был мәлдә рус телендә һауа торошо тураһында мәғлүмәт бирелә икән. Ҡарт "местами дожди" тигәнде ишетеп ҡала һәм ҡабат сисенә башлай. Әбейенең һорауына ул: "Бөгөн баҫыуға бармайым, ана бит, Мөстәмдә дожди, тип әйтteләр", - тип кенә яуаплай.

**Римма ЯРМУЛЛИНА.**
**Баймаҡ районы Ҡарамалы ауылы**

### "Минеке түгел"

Был мәҙәкте миңә Ғәлимә инәй һөйләгәйне. Был хәл беҙҙең ауылдағы "Миләш" балалар баҡсаһында булған. Бер көндө бер малай ботинкаһын кейә алмай интеккәс, тәрбиәсе уға ярҙамлашырға була. Тик ниңәлер аяҡ кейеме кейелмәй ҙә ҡуя икән. Тәрбиәсе интегеп, тирләп-бешеп, ботинкаларҙы саҡ кейҙерә. Шатлығынан ни эшләргә белмәй, инде тороп китәм тигәнендә, малай ботинкалар дөрөҫ кейелмәгән тип яр һала. Тәрбиәсе ҡараһа, ысынлап та, уңы - һулға, һулы - уңға кейҙерелгән икән. Аяҡ кейемен кейҙереүгә ҡарағанда, систереүе ҡыйыныраҡ була. Тәрбиәсе илар сиккә етә. Инде кейҙереп бөткәндә, малай ҡарап тора-тора ла: "Ә был ботинкалар минеке түгел", - ти. Тәрбиәсе, ирендәрен тешләп, көс-хәл менән ҡабаттан аяҡ кейемен һалдыра. Малай шуны ғына көткәндәй: "Улар ағайымдыҡы", - ти. Һуңғы түҙемлеген һәм көсөн йыйып, тәрбиәсе ботинкаларҙы ҡабат кейҙерә. Инде тышҡа сығарам тиһә, баланың ҡулында бейәләйе юҡлығын күрә һәм: "Ҡайҙа бейәләйҙәрең?" - тип һорай. Малай: "Ә мин уларҙы ботинкаға тығып ҡуйғайным", - тип яуаплай.

### Кредитҡа сығыу

Беҙҙең күршелә Әсмә инәй йәшәй ине, хәҙер ул мәрхүмә инде. Ул бер үҙе йәшәне, балалары ситкә китеп бөткәйне. Яңғыҙ булғанға микән, гел генә кискеһен урамдағы эскәмйәгә сығып ултыра торғайны. Быны күргән күрше-тирә, Әсмә инәйгә күңелһеҙ булмаһын өсөн эргәһенә килеп һөйләшеп, хәлен белешеп ултырыр ине. Шулай итеп, бер мәл инәйҙән: "Ейәнейәнсәрҙәрең килеп йөрөймө һиңә?" - тип һорағандар. "Ҡайҙан ғына килһендәр инде, мине оноттолар улар хәҙер", - тип яуаплаған инәй уфтанып. - Иршат ейәнем килеп киткеләй торғайны, кәләш алғас, ул да бушамай инде...

- Кәләше уңғанмы, матурмы? - тип һорауҙарына инәй эре генә:

- Аҡыллы ғына былай, хәҙер кредитҡа сыҡты инде - тип яуаплай.

Декретҡа сығыуҙы "кредитҡа" сығыу менән бутап, беҙҙең ауыл мәҙәктәре репертуарын байытты шулай.

### "Тағы авария!"

Ауылдың осонда Хәммәт ағай йәшәй. Ул йәш сағында уҡымаған, бер класта әллә бер-ике йыл ултырған, тик барыбер өйрәнмәгән. Өйгә гәзит килһә, яңылыҡтарҙы уға ҡыҙы уҡып биргән, берәй ниндәй документ тултырырға кәрәк булһа, ҡатыны ярҙамлашҡан.

Бер көндө шулай өйҙәренә гәзит килгән. Хәммәт ағайҙың тиҙерәк яңылыҡтарҙы ишеткеһе килгән, тик ҡатыны эшенән бушамай икән. Шул ваҡыт ағайыбыҙ, уҡый белмәһә лә, гәзитте ҡыҙыҡһынып ҡулына алған да ҡараштыра башлаған. Бер аҙҙан ҡатынына өндәшә, ти:

- Әҡлимә, ҡара әле, ҡасан ҡарама, ошо гәзиттә авария ла авария... Гел генә түңкәрелгән машиналар...

Ҡатыны килеп ҡараһа, Хәммәт ағай гәзитте баш түбән тотоп ултыра икән.

**Сөмбөл Байғобәкова.**
**Баймаҡ районы**
**Үрге Яйыҡбай ауылы.**

### Һеләүһен тырнаны

Боронораҡ беҙҙең ауылда бер әбей менән бабай йәшәгән. Бер ваҡыт былар талашып китәләр ҙә, әбейе бабайҙың битен тырнай. Бабайҙан кешеләр: "Нимә булды?" - тип һораһа, ул: "Һеләүһен тырнаны", - тип яуаплаған. Аҙаҡтан кешеләр хәлдең ысынында нисек булғанын беләләр. Хәҙер ҙә кемдеңдер берәй ере тырналһа, "Нимә, әллә һине лә Фатима тигән "һеләүһен" тырнанымы?" тип көләләр.

**Рәсилә Усманова.**
**Баймаҡ районы Шүлкә ауылы.**

### Килһә, шылтыратһын...

Кеҫә телефондары сыҡҡан ғына ваҡытта балалары әсәләренә телефон һатып алып бирә. Бер көнө әбей улына шылтырата. Ә унда автоответчик: "Апарат вызываемого абонента выключен или находится вне зоны действия сети", - тип яуаплай. Быға әбей: "Рәхмәт, рәхмәт, улым килһә, миңә шылтыратһын тип әйтерһегеҙ әле", - ти икән.

**Ләйсән Дәрмәнова.**
**Баймаҡ районы Таулыҡай ауылы.**

### "Күршем, мин тереме?"

Был хәл Аҡъяр ауылында борон булған. Минең ҡартатайымдың әсәһе Аҡъяр ауылына күсеп килгән һәм шунда йәшәй башлаған. Ул бөтөп барған ауылдың иң осонда йәшәгәс, насар кешеләрҙән һаҡланыр өсөн гел тәҙрә төбөндә мылтыҡ тотҡан. Бер көндө күрше әбейе килеп ингән. Өләсәйем: "Кем унда?" - тип һораған да, ҡапыл һауаға атып та ебәргән. Күрше әбейе ҡурҡышынан ергә ҡолаған. Шунан ҡартатайымдың әсәһе тегене танып ҡалып, янына сыҡһа, күрше әбейе быға: "Күршем, тыңлап ҡарале, мин тереме?" - тип һорай ти.

**Надир Әбделмәнов.**
**Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы**

### "Әделгәрәй ағай ни әйтер?"

Беҙҙең ауылда бер ир күршеһе менән кәңәшләшмәйенсә эш эшләмәгән. Шулай бер көндө хужалыҡ етәксеһе килгән был иргә һәм уны эшкә саҡырған. Ир ҡаты ғына уйлап торғандан һуң, ни әйтергә белмәйенсә, кейенә башлаған. Аптыраған етәксе: "Һин ҡайҙа бараһың?" - тип һораған. Тегеһе: "Мин күрешемә инеп сығайым әле," - ти икән. Етәксе: "Минең башҡа эштәрем бар, сығаһыңмы эшкә, әллә юҡмы?" - тип һорағас, был ир: "Туҡта, Әделгәрәй ағай ни әйтер..." - тип, үҙ алдына мығырлап сығып киткән. Шунан һуң ауылда берәй хәл итер мәсьәлә килеп сыҡһа: "Туҡта, Әделгәрәй ағай ни әйтер..." - тип үҙ-ара көлөшөр булғандар.

### Афзал не видал?

Әсәйем сығышы менән Баймаҡ районы Йомаш ауылынан. Ул шул яҡтарҙа таралған бер лаҡаптың тарихын һөйләне. Бер бабай ауылдан Сибай ҡалаһына заводта эшләгән улын эҙләп килгән. Улының исеме Афзал булған. Был бабай малайының ҡайҙа йәшәгәнен, эш урынын белмәгән. Ауылдан килгән был бабай Сибай вокзалында һәр кешенән: "Афзал не видал?" - тип һорай икән. Шулай итеп, ул көнө буйы йөрөгән. Аҙаҡ бер ауылдашын осратып, саҡ улын барып тапҡандар. Шул ауылдашы был хәлде ауылға ҡайтып һөйләгән. Берәй нәмә эҙләһәләр, әле лә шулай "Афзал не видал?" тип мәрәкәләйҙәр.

**Рәмил Ишмөхәмәтов.**
**Сибай ҡалаһы.**

### Ҡул күтәрмәгәс ни...

Баҙар көндө, кесе йомала Муйнаҡ ауылынан Бикмырҙа ҡатынын ултыртып, Һарыҡташ ҡасабаһына китә. Үҙе яғыулыҡ-материалдар тейәп кире әйләнеүенә, ҡатыны баҙарҙағы эштәрен бөтөрөп, юл ситендә баҫып торған була. Тик Бикмырҙа уның эргәһенән үтә лә китә. Ҡатыны иртәгәһенә генә ҡайтып төшә. "Нишләп туҡтап ултыртманың?" - тиеүенә ире бер ҙә бошмай ғына эҫе сәйен өфөлдәп эсеүен дауам итеп: "Ҡулыңды күтәрер кәрәк ине, шунда ултыртыр инем..." - тигән. Баяғы шуҡлығымы, мутлығымы - үҙе генә белә инде.

### Ҡабру убрали

Ейәнсура районының Ибрай ауылында Һүрәм йылғаһы буйында Ҡабра тауы бар. Беҙҙең ауылдан бер егет әрменән ҡайтып килә икән. Өфөнән оҙон көн буйы автобуста килә торғас, ойоп киткән был. Ә күрше Күгәрсен районында ла Ибрай ауылы бар. Автобус шоферы ошо ауылда туҡтай ҙа, туҡталышты иғлан итә. Пассажирҙар менән бергә теге егет тә төшөп ҡала. Ҡараһа - ауыл бар, ә Ҡабра тауы юҡ. Аптырап тора ла был: "Мин хеҙмәт иткән арала Ҡабру убрали икән", - тип әйтеп ҡуя. Хәҙер ҙә юҡ-юҡта шулай тип әйтеп һалалар беҙҙә.

**А. Йәғәфәров.**
**Ейәнсура районы Ибрай ауылы.**




### "Хватит, шофер!"

Һуғыштан һуңғы йылдар. Техника таралып етмәгән осор. Ауыл еренән район үҙәгенә йомошоң төшһә, йәйәүләп юл алаһың. Баймаҡ районында йәшәгән Мәрфуға инәй ҙә ҡара таң менән тороп, Баймаҡҡа юллана. Ауылды сығып күп тә атламай, көплө йөк машинаһы килеп туҡтай. Мәрфуға инәй урыҫ шофер егетенә ҡайҙа барғанын әйтә лә, кузовҡа менеп тә китә. Тик Баймаҡҡа килеп еткәс, шофер егет туҡтамай, ҡаланан сыға башлай. Мәрфуға инәй урыҫ телендә икмәк-тоҙлоҡ ҡына белгән була. Урыҫ егетенә бар белгән һүҙҙәрен ҡысҡырып ҡарай, тик тегеһе ишетмәй икән. Инде ни әйтергә белмәгән инәй: "Хватит, шофер, Мәрфуға говорит", - тип ҡысҡыра башлай. Шофер уны ултыртып алғанын иҫләп булһа кәрәк, туҡтап, тегене төшөрөп ҡалдыра.

Хәҙер ҙә беҙҙең яҡтарҙа, ҡабаланһалар, йә туҡтатып тор эшенде, тип әйтергә теләһәләр, "Хватит, шофер, Мәрфуға говорит" тигән лаҡапты телгә алалар.

**Әминә Мусина.**
**Баймаҡ районы Аҡтау ауылы**

### "Даңғыр-доңғор, иһа-һай!"

Бер ҡарттың йылҡы малы юғалған була. Шуларҙы эҙләп, күрше ауылдарға ла сыға. Күп ерҙәр үткәндән һуң бер урыҫ ауылына етә. Ул ваҡыттарҙа урыҫ телен белеүселәр әҙ була. Был ҡарт бер урыҫты осрата һәм аттарын эҙләп йөрөүен аңлатырға тырышып: "Һин даңғыр-доңғор, иһа-һай не видал?" - тип һорай. Хатта ат булып кешнәп тә ебәрә. Урыҫ шунда уҡ ҡарттың нимә тураһында һорауын аңлай. Шунан алып беҙҙең ауылда берәйһенең аты юғалһа, "Даңғыр-доңғор, иһа-һай таптыңмы?" тип һорайҙар.

**Ильвира Сәлимйәнова.**
**Баймаҡ районы Йәнйегет ауылы**

### "Ҡойонан бай!"

Беҙҙең ауылда булды был хәл. Бәләкәй саҡтан минең менән бер урамда үҫкән Гөлдәр исемле ҡыҙ бала саҡта "Р" хәрефен әйтә алманы.

Бер ваҡыт Гөлдәр ямғыр яуғандан һуң ҡустыһы менән урам буйына уйнарға сыға. Ҡустыһы ҡойо кисеп тик йөрөй, ти. Гөлдәр уға: "Ҡойонан барма, ҡоронан бар!" - тип әйтә үҙенсә, тик урынына "Ҡойонан байма, ҡойонан бай!" килеп сыға. Шул ваҡыттан алып беҙҙең урамда Гөлдәрҙең шул һүҙҙәре лаҡап булып йөрөй.

### "Ҡаҙ яуа!"

Быныһы инде күрше ауылда булған хәл. Бәләкәй ҡыҙ бала "Р" хәрефе урынына "Ҙ" хәрефе менән һөйләшкән. Бер мәл был ҡыҙ урам буйында уйнап йөрөгәнендә ҡар яуа башлай. Ул йүгереп инеп, ата-әсәһенә: "Тышта ҡаҙ яуа! Ҡаҙ яуа!" - тип һөйөнсөләй, - "Түлкә ҡаҡ-ҡаҡ түгел," - тип үҙен-үҙе төҙәтеп тә ҡуя. Шунан бирле ул ауылда ҡар яуа башлаһа шулай тип әйтәләр.

### "Мин дә, Мәрйәм дә аптырай!"

Ауылымда булған хәл. Берәүҙең ҡаҙҙары йомортҡаны тауыҡ һалып йөрөгән урынға һалып китә. Ғаилә башлығы, ҡалай ҙур йомортҡа һалған тауығыбыҙ, тип аптыраған. Өйгә инеп, ҡатынына күрһәткән. Хәҙер инде икәүләп аптырайҙар. Был ир йомортҡаһын тотоп, уны күршеһенә күрһәтергә киткән. Инеп күрһәткән дә, әйтә ти: "Мин дә аптырайым, Мәрйәм дә аптырай!" Шунан һуң беҙҙең ауылда бер нәмәгә аптыраһалар, "Мин дә аптырайым, Мәрйәм дә аптырай!" тип әйтәләр.

**Даян Ласынов.**
**Әбйәлил районы Хәлил ауылы.**

✓ *Шиғриәттең форма, образ, логика кеүек төшөнсәләр менән тығыҙ бәйләнештә йәшәүен мин тәүгә Таңһылыу апайҙан ишеттем. Йылдар үткән һайын унының алдыбыҙға ҙур маҡсаттар ҡуйыуын яҡшы аңлайым.*



КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# СӘҒИТ АГИШ ХАҠЫНДА

**Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең ғилми архивы фондында башҡорт яҙыусыһы Сәғит Агиштың шәхси фонды ла үҙ урынын тапҡан. Материалдар архив ҡарамағына 1984 йылда тапшырыла. Өс бүлектән торған күсермәлә 1939-1982 йылдарға ҡағылышлы булған мәғлүмәттәр тупланған. Бүлектәрҙең өсөнсөһө - яҙыусыларҙың, ҡәләмдәш дуҫтарының яҡты иҫтәлектәре, шиғырҙарынан торған өлөшө бигерәк ҡыҙыҡлы һәм әһәмиәтле.**



1984 йылдарҙағы иҫтәлегендә яҙыусы, әҙәбиәт ғилеме белгесе, ғалим Миҙхәт Ғәйнуллин былай тип яҙа: "Башҡорт әҙәбиәте һәм милли мәҙәниәтебеҙҙең күренекле эшмәкәрҙәре хаҡында иң күп һәм иң һәйбәт, файҙалы һәм кәрәкле иҫтәлектәр яҙған кеше - ул Сәғит Агиш булды. С. Агиш иҫтәлектәренең ҡиммәте шунда: ул хатта үҙе күренмәй ҙә, әммә иҫтәлек йөрөтөлгән кешене айырым характер үҙенсәлектәре менән тулыһынса күҙ алдына килтерә".

С. Агиш талантлы яҙыусы ғына түгел, йор һүҙле, оптимист кеше булараҡ та асыҡлана. Халыҡ яҙыусыһы Мостай Кәрим үҙенең "Ул дәү кеше ине" тип аталған иҫтәлегендә яҙыусы тураһында былай тип яҙа: "Бер ваҡыт икәүҙән-икәү һөйләшеп ултырғанда Сәғит Агиш былай тине:

- Ауыҙында һүҙ тормай, тиҙәр миңә.

- Шулайыраҡ тиҙәр шул, - "тиҙәр" һүҙенә мин баҫым яһай төштөм.

- "Тиҙәрен" өҫтәмәһәң дә була инде. Үҙең дә шулай уйлайһың бит.

- Оя ситенә үк килеп, тышҡа башын һуҙған ас турғай балаһы шикелле, ысҡынырға ғына тора инде ауыҙындағы һүҙең, - тип тасируйлап ҡуйҙым мин.

- Һин шаяртма әле. Ауыҙымда һүҙ тормаһа ла, күңелемдә сер тора минең. Шулай ҙа кешегә әйтергә ярамаған серҙе миңә һөйләр булһаң, алдан киҫәтеп ҡуй. Мин уны үҙем дә тапмаҫлыҡ урынға йәшерермен.

Һәм шулай булды ла. Ғүмеренең һуңғы егерме биш йылында Сәғит ағай менән мин байтаҡ сер уртаҡлаштым, шиктәрем, борсолоуҙарым менән бүлештем. Шуларҙың береһе лә, мөгөҙ үҫтереп, ҡойроҡ тағып, имгәкләп үҙемә әйләнеп ҡайтманы..."

Үҙенең иҫтәлегендә Мостай Кәрим Сәғит Агиштың ысынлап та оҫта, тапҡыр телле, аҡыллы булыуы хаҡында яҙа. Үҙенән өлкән яҙыусының һөйләгән мәҙәктәрен, фажиғәле һәм ғибрәтле әңгәмәләрен яҙып барырға булған, тип тә үкенә. Үҙендән алда донъя ҡуйған иптәштәрең, дуҫтарың, замандаштарың хәсрәт, мираҫ, аманат менән бергә үкенестәр ҙә ҡалдырып китә, тип әрней. Мостай Кәрим хәсрәттең һыуыныуын, мираҫтың заманға хеҙмәт итеүен, аманаттың быуынды-быуынға бәйләүен, үкенестәрҙең күңелде әрнетеп, намыҫҡа тынғылыҡ бирмәүен һәм был тормошта һис бер нәмәнең бушҡа ғына килеп китмәүен билдәләп, яҙыусы Сәғит Агиш тураһында яҡты уйҙары менән бүлешә.

Башҡорт яҙыусыһы Ғәзим Аллаяровтың 1980 йылдарҙағы ҡулъяҙмаларында ла Сәғит Агиш тураһында әйтелә. Ул Ҡыйғы районының "Социализмға" тип аталған гәзитендә эшләп йөрөгән осоронда Сәғит Агиштың районға килеп әҙәбиәт һөйөүселәр, әҙәби түңәрәккә йөрөүселәр менән осрашыуҙар ойоштороуы хаҡында һөйләй. "Үткер ҡара күҙле, сапсан ғәҙәтле, асыҡ йөҙлө шаян яҙыусыны быға тиклем күргәнем генә бар ине, тик был юлы танышыу бәхетенә өлгәштем. Яҙыусы Сәғит Агиш ғүмере буйы хуш күңелле, алсаҡ, башҡаларға ярҙамсыл кеше булып ҡалды. Миңә ҡалһа, ул үҙенең йөрәгендә бер кемгә лә асыу йөрөтмәгәндер. Яҙыусылар союзына алыныуымдан күп йылдар элек Сәғит ағай миңә рекомендация яҙып тотторҙо. "Алырҙар. Алмаһалар, минең иҫтәлек итеп һаҡларһың", - тине ул йылмайып. Эйе, ул ҡиммәтле иҫтәлекте мин байтаҡ йылдар кеҫәмдә йөрөттөм, ә хәҙер инде йөрәгемдең түрендә һаҡлайым", - тигән юлдар һаҡланған Ғәзим ағай яҙмаларында.

"Күп йылдар буйына йыйылған кәрәкле ҡағыҙҙар араһында бик ҡәҙерле бер ҡомартҡы бар - ул 1947 йылда Сәғит Агиш ҡулы менән яҙылған рецензия", - тип, иҫтәлектәрҙе дауам итә билдәле драматург Әсғәт Мирзаһитов. Сәғит Агиш тарафынан уның "Бөйөк дуҫлыҡ" пьесаһына характеристика бирелә. Ул авторҙың матур образлы телгә эйә өмөтлө ҡәләм эйәһе булыуын билдәләй, был эш менән артабан да шөғөлләнергә кәңәш бирә.

Яҙыусы Сәғит Агиш тураһындағы архив материалдарының барыһына ла туҡталып бөтөрлөк түгел, уларҙың һәр ҡайһыһы ҡыҙыҡлы һәм һәр ҡайһыһы тарихи әһәмиәткә эйә. Яҙыусының шәхес булараҡ үҙенсәлекле холҡон, килешмәгән хәлдәргә ҡарата йомшаҡ ҡына әйткән булып та, үткер итеп көлөп ҡуйыуын, ауыр саҡтарҙа күңел көрлөгөн юғалтмауын, тышҡы ҡиәфәтен, кәүҙәһен, үҙен тотошон күҙ алдына килтерергә мөмкинлек биргән был үҙенсәлекле фонд материалдары бөгөн дә йәш быуын ғалимдарын, яҙыусыларын, әҙәбиәт һөйөүселәрҙе ҡыҙыҡһындыра һәм шәхескә арналған мәғлүмәттәр менән тулылана бара.

**Луиза ҒИНИӘТУЛЛИНА,**
**Рәсәй Фәндәр академияһы**
**Өфө ғилми үҙәгенең**
**ғилми архив мөдире.**

УҠЫП СЫҠТЫМ...



# ТАҢ ЫСЫҒЫ САФЛЫҒЫ - ҺҮҘҘӘРЕНДӘ

**Яҡтылыҡтан арта яҡтылыҡ, тигән әйтемде иҫкә төшөрҙөм "Киске Өфө" гәзитенең 29-сы һанында сыҡҡан "Күңелдәге сафлыҡ... йәрҙе, илде, халҡыңды, донъяны яратыуҙан ул" тигән мәҡәләне уҡығас. Беҙҙе студент саҡта яҡты ҡарашы, яғымлы мөнәсәбәте менән ҡаршы алған күренекле шағирә Таңһылыу апай Ҡарамышеваның шул саҡтарҙағы бөтә күңел донъяһы, асылы күҙ алдыма баҫты.**

Әҙәбиәттә элек-электән үҙеңдән арттан килгән быуынды ҡурсалау кеүек күренеш йәшәп килә. Халҡыбыҙҙа рухи туғанлыҡ та, ҡан туғандай яҡын, күрәһең, тип яҙғайным бер шиғрымда. Шуның кеүек, әҙәбиәтсе апайҙарҙы, ағайҙарҙы, ысынлап та, үҙ туғаныңдай яҡын күреп, бар йөрәгең менән ярата башлайһың.

Башта "Ағиҙел" журналы эсендә сығып килгән "Шоңҡар" журналының нәшер ителә башлауы халҡыбыҙ тормошонда ҙур ваҡиға булды. "Йәшлек" гәзитен ойоштороу, иң ҡыҙыҡлы, милли аңды, рухты уятырлыҡ мәҡәләләрҙе ҡыйыу рәүештә башҡорт матбуғаты биттәренә сығарыу кеүек эштәрҙе башлап ебәргән кешеләрҙең береһе Таңһылыу апай менән "Шоңҡар" журналы редакцияһында таныштыҡ. Уның менән булған осрашыуҙар беҙгә, йәштәргә үҙе бер дәрес кеүек булған икән, тим мин хәҙер. Белмәйем, Таңһылыу апай уларҙы үҙе хәтерләйме икән, әммә шәхсән күңелемдә уйылып ҡалды. Ул беҙгә мәҡәлә яҙырға темалар тәҡдим итә, үҙе тарихи ваҡиғалар, шәхестәр тураһында һөйләй. Ялҡытҡыс лекциялар түгел шул уның фекерҙәре, ул һәр ваҡиғаның йәки билдәле кешенең тормошона бәйле иң сағыу мәлдәрҙе кинәйәләй, күҙҙәрҙән йәш сыҡҡансы халҡыбыҙҙың ҡаһарман үткәне менән таныштыра. Ҡыйыулығы тамам әсир итә: һис бер нимәгә ҡарап тормай, халыҡтан йәшерелгән тарихи даталарҙы тота ла журналда баҫтырып сығара. "Урал батыр" эпосына яңыса ҡараш, Салауат Ғәләмовтың яҙмалары башҡорт фекере донъяһында үҙе бер революция булды.

Журнал ижади йәштәрҙе туплаусы ролен дә башҡарҙы һәм бөгөн дә, Аллаға шөкөр, баҫма был маҡсатынан тайпылмай. Бер осрашыу ныҡ хәтеремдә, әлеге лә баяғы Таңһылыу апай үҙе хәтерләйме икән, юҡмы, әммә миңә шиғриәт буйынса ҙур һабаҡ булды был күрешеү. Ҡыҙҙар менән шиғырҙарыбыҙҙы алып барҙыҡ "Шоңҡар"ға. Таңһылыу апай сәйҙәр ҡуйып ебәрҙе. Үҙе беҙгә башҡорт шағирәләренең шиғырҙарын уҡый. "Һеҙ кемде уҡыйһығыҙ?" тигән һорау ҙа ҡуйҙы. Рәмзилә Хисаметдинова, тигән яуап та яңғыраны беҙҙең аранан.

- Рәмзилә! Ул Рәмзилә бит ул! - тине Таңһылыу апай. Ул беҙгә, һоҡланып, әхирәте хаҡында, уның шиғырҙары тураһында һөйләй башланы. - Бына көҙ һеҙҙең менән осрашыуға барырбыҙ, шунда Рәмзилә апайығыҙҙың үҙенән һорашырһығыҙ шиғриәте тураһында, - тине фекерен йомғаҡлап. Шиғриәттең форма, образ, логика кеүек төшөнсәләр менән тығыҙ бәйләнештә йәшәүен мин тәүгә Таңһылыу апайҙан ишеттем. Бик ҡатмарлы нәмәләр тураһында һөйләгән кеүек ине миңә, әммә йылдар үткән һайын уның алдыбыҙға ҙур маҡсаттар ҡуйыуын яҡшы аңлайым. Шиғырҙарымды ҡарап сығып, артыҡ әллә ни ҙә әйтмәне кеүек, әммә "Шоңҡар"ҙа улар баҫылып сыҡҡас, таң ҡалдырҙы Таңһылыу апайым. Ана шул баяғы логика менән форма үҙенсәлеге тигән төшөнсәләрҙе лә эшкә егеп күрһәткән ул миңә. Бына һиңә - мә, нишләп үҙемдең шуға башым эшләмәне икән, ҡалай матурланған шиғырҙарым, тигән кисерештәремде яҡшы хәтерләйем. Рәхмәт һиңә, Таңһылыу апай, яҡты һабаҡтар өсөн!

Ысынлап та, көҙөн улар Башҡорт дәүләт университетына осрашыуға килде. Таңһылыу Ҡарамышева, Гөлфиә Юнысова, Рәмзилә Хисаметдинова сығыш яһаны тантаналар залында. Байтаҡ әҙиптәр сығыш яһаны унда. Мин һоҡланған Рәмзилә апайым шул тиклем ябай кеше булып тойолдо, ҡалала йәшәгән әҙибәләрҙән тәбиғи аралашыуы, моңһоулығы менән айырылып торған кеүек булды ул миңә. Улар үҙ-ара мөнәсәбәттәре, шиғри түңәрәктәрҙең эшмәкәрлеге хаҡында шаярып та, көлөп тә бәйән иттеләр. Их, ҡыйманым бит шунда Таңһылыу менән Рәмзилә апайҙар янына барырға. Бер үкенес булып ҡалды. Рәмзилә апайыбыҙ йәйен мәңгелеккә хушлашты беҙҙең менән. Юҡҡа ғына әхирәте, уның ижады тураһында өҙгөләнеп һөйләмәгән икән Таңһылыу апай: ҡыҫҡа ғына ғүмерендә ана ниндәй шиғри гәрәбәләр ҡалдырҙы беҙгә Рәмзилә Хисаметдинова!

Шағирә Таңһылыу Ҡарамышева байтаҡ йылдар Башҡортостан Яҙыусылар союзында шиғриәт секцияһы етәксеһе лә булды. Миңә лә насип итте шул ваҡытта йыйынтыҡтарымды тикшертергә. Нимәһе өсөн күңелемдә йәнә рәхмәт хисе уяна, ул да булһа йөрәкһеп торған саҡта ауыр ҡағылмауы. Ижад бит ул - иң тәү сиратта, шәхси асыштар, кисерештәр донъяһы, йөрәк аҡылы. Үҙәгемдә яралған тойғоларым, бөрөләй хистәрем ижадта сағылғанда йылы тын өргән, бәпләп үҫтергән әҙибә ул - Таңһылыу апай. Бына әле лә "Киске Өфө"лә уның яҡтылыҡ менән һуғарылған, тәрән мөхәббәт менән тулышҡан яҙмаһын уҡып сыҡтым да, халҡыбыҙҙың аҫыл ҡыҙына һоҡланыуымды еткергем килде. Ысынлап та, башҡорт шағирәһенең, башҡорттоң данлыҡлы Ҡарамышевтар нәҫеле ҡыҙының мөхәббәте барыһына ла етә: йәренә лә, иленә лә, кешелеккә лә!..

**Лариса АБДУЛЛИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛАҢА...

## үҙең өлгө күрһәт

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, музыканттарҙың хәтере башҡа кешеләрҙекенә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Юта университеты (АҠШ) үткәргән һынауҙарҙа 14 музыкант һәм музыкаға бер ҡыҫылышы ла булмаған 15 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың барыһына ла картиналар йәки һүҙҙәр йыйылмаһы тәҡдим ителгән. Шул уҡ минутта улар әле генә күргән һүрәттәрен йәки һүҙҙәрҙе икенсе өйөмдә яткан картиналар араһынан һайлап алырға тейеш булған. Музыканттар ике осраҡта ла эште тиҙерәк башҡарған һәм һирәгерәк яңылышҡан. Музыкант һөнәрен һайлаусыларҙың хәтере ни өсөн нығыраҡ үҫешеүен ғалимдар аңлата алмай. Һәр хәлдә, ниндәйҙер музыка ҡоралында уйнау, сәнғәт менән ҡыҙыҡһыныу кешенең аҡыл ҡеүәһен үҫтерә, был тикшеренеүҙәр ошоно дәлилләй.

■ Яланда үҫкән аҡ сәскә стресс, нервы көсөргәнеше һәм хәүеф тойғоһонан ҡотолорға ярҙам итә. Ул хатта химик юл менән яһалған ҡиммәтле тынысландырыусы дарыуҙарҙы ла алыштыра ала. Аҡ сәскәнең файҙалы яҡтарын АҠШ-ла тикшереп ҡарағандар. Эксперимент барышында аҡ сәскә төнәтмәһе ҡулланыусылар стресс һәм хәүеф тойғоһонан тулыһынса арына алған. Аҡ сәскә төнәтмәһе сәләмәтлеккә зыян килтермәй генә йоҡоһоҙлоҡтан дауалай, шулай уҡ артыҡ әүҙем балаларҙы тынысландырырға ярҙам итә. Аҡ сәскәнең файҙалы сифаттары ысынлап та бик уникаль, сәскәнең бай химик составы уны төрлөсә ҡулланырға мөмкинлек бирә, ти ғалимдар. Уны юҡҡа ғына халыҡ дауаһында ҡулланмайҙар. Аҡ сәскә сәйе, мәсәлән, үт ҡыуығы менән ашҡаҙан эшмәкәрлеген көйләй. Шулай уҡ тын юлдары инфекциялар мәлендә ул бик файҙалы. Аҡ сәскә сәйен шөкәрһеҙ эсәләр.

■ Австралияның туҡланыу өлкәһендәге тикшеренеүҙәр үҙәге мәғлүмәттәренә ярашлы, күптәр иртәнге ашты ашамай. Тасманиялағы Мензис ғилми-тикшеренеү институты үткәргән тикшеренеүҙәр раҫлауынса, оҙайлы ваҡытҡа иртәнге аштан баш тартыу йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәренә һәм диабетҡа килтереүе ихтимал. Тикшеренеүҙәр авторы Кайли Смит әйтеүенсә, иртәнге аш артыҡ ауырлыҡты кәметергә ярҙам итеп кенә ҡалмай, ҡандағы инсулин һәм холестеринды бер кимәлдә тота һәм шуға ла йөрәк сирҙәре һәм диабеттың үҫешенә юл ҡуймай. Был тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, сәләмәт булыу өсөн иртәнге аштың әһәмиәте бик ҙур. Ғалимдар фекеренсә, ата-әсәләр балаларына яҡшы миҫал күрһәтергә һәм көндө файҙалы аҙыҡтан башларға тейеш.

■ Автомобиль газы менән бысранған һауа ғүмерҙе ҡыҫҡарта ала. Британия ғалимдары һанап сығарыуынса, ҡала халҡы йыл һайын уртаса 6 ай ғүмерен юғалта. Британияла бысраҡ һауа һәҙәмтәһендә барлыҡҡа килгән йөрәк һәм үпкә сирҙәренән яҡынса 50 000 кеше үлә. Экологик комитет ағзаһы Джоан Валей был мәсьәләне тиҙ арала хәл итергә кәрәк, тип иҫәпләй. Билдәле булыуынса, машиналар PM10 аталған матдә йәки ҡаты өлөшсәләр бүлеп сығара. Британияның ҡайһы бер өлкәләрендә был өлөшсәләр күләме Евросоюз билдәләгән норманан күпкә үтеп китә. Был өлөшсәләр респиратор системаһына һәм тукымаларға үтеп инә һәм үпкә, йөрәк сирҙәре, астма барлыҡҡа килтерә. Ғалимдар бысраҡ һауаны хәҙер тәмәке төтөнөнә тинләй. Тәмәке тартмаһа ла, даими рәүештә тәмәке төтөнө килтергән зыяндан үлеүселәр һаны бөтә донъяла 600 мең булһа, бысраҡ һауаның сәләмәтлеккә зыяны иҫәпләп бөтөп тә булмай, ти белгестәр.

БӘХӘС ҠОРО

**Иҫ белгәнемдән алып өләсәйемдең "Аллаһы Тәғәлә бар һәм бер", тигәненә инанып үҫтем. Ул дин тыйылған замандарҙа ла Аллаһҡа һыйынып һәм һығынып йәшәне, уның үҙе белгән, ата-әсәһенән, ололарҙан тапшырылған ҡанундарын теүәл үтәргә тырышты. Ләкин мин уның ауыҙынан бер ваҡытта ла динде милләткә ҡарап та, башҡа атамалар ҡушып та бүлгеләүен ишеткәнем булманы. Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институты Мосолман мәғарифын үҫтереү буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенең Рәсәй мосолмандарының Үҙәк һәм Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараттары менән берлектә ойошторған "Традицион ислам: төшөнсәһе, асылы, йөкмәткеһе" тип исемләнгән ғилми-ғәмәли семинарында ҡатнашыусы дин белгестәре һәм ғалимдар был йәһәттән төрлө фекер белдерҙе.**

# ТРАДИЦИОН ИСЛАМ БАРМЫ?



Ғәмәлдә, Ислам төшөнсәһе үҙе үк бер бөтөндө аңлата, әммә унда төрлө йүнәлештәр барлыҡҡа килеү сәбәпле, хаҡ динде башҡаларынан, бигерәк тә радикаль йүнәлешлеләренән айырыу өсөн телебеҙгә "традицион ислам" тигән атама мәжбүри рәүештә килеп инде. Сөнки хаҡ диндә ҡан ҡойоу, кеше ғүмерен өҙөү, көс ҡулланыу бөтөнләй ят күренеш булһа, уға яңы идеология индереүселәр быларҙың барыһын да ғәҙәти күренеш тип һанай һәм ошо йәһәттән көслө пропаганда алып бара. Семинарҙа ҡатнашыусылар белдереүенсә, йәштәр уларҙың өндәүенә, пропагандаһына ҡаршы тора алмай, яуап бирергә ғилемдәре етмәй һәм, һәҙәмтәлә, махсус әҙерләнгән профессиональ агитаторҙар, пропагандистар ике юл сатында ҡалған йәш быуынды үҙе артынан эйәртергә лә күп һорамай. Бәйғәмбәребеҙ үҙенең хәҙистәренең береһендә диндәрҙең, шулай уҡ үҙ өммәтенең дине лә 73 фирҡәгә бүленәсәген белдергән һәм шуларҙың береһенән башҡалары утта янасаҡ, тигән. Ә инде тамуҡтан ҡотоласаҡ төркөмдөң кем икәнлеген һорағас, ул: "Бөгөн мин һәм минең арҡаҙаштарым ниндәй юлда, шул юлды дауам итеүселәр", - тип яуаплаған.

Ошо ысынбарлыҡты күҙ уңында тотоп, бөгөн дин әһелдәре, ғалимдар йәмғиәт өсөн файҙалы булған йүнәлеште һайлап, мосолман ҡәрҙәштәребеҙҙе башҡа тайғаҡ юлдарҙан аралап ҡалырға тырыша ла инде. Был йәһәттән республикала өс кимәлле ислам мәғарифы системаһы: мәсеттәр ҡарамағындағы курстар, мәҙрәсәләрҙә уҡыу һәм Ислам университеттарында белем алыу, белем камиллаштырыу системаһы булдырылған. Был хаҡта үҙенең сығышында Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты Рәсәй Ислам университетының уҡытыу эштәре буйынса проректоры Ринат Кәлимуллин бәйән итте. Уның билдәләүенсә, был мәғариф системаһының беренсе кимәле - профессиональ ислам белеме биреү, икенсеһе - юғары ислам белеме биреү, өсөнсөһө - белемде арттырыу, камиллаштырыу. Был өс кимәлле белем биреүҙең төп маҡсаты булып шәхесте үҫтереү, уны диндәге хаҡ (урталыҡтағы) юлға яҡынайтыу тора.

Өфө дәүләт авиация техник университетының Нефтекама филиалы профессоры Марат Яҡупов ислам динен өс йүнәлешкә: урталыҡта торған хаҡ исламға, либераль (азат) исламға һәм сәйәси исламға бүлә. Хаҡ ислам - Бәйғәмбәребеҙ дине, уның юлы. Либераль ислам хәүеф тыуҙыра, сөнки ул Ҡөрьән уҡы, Бәйғәмбәребеҙҙе таны һәм үҙең теләгәнсә йәшә, мәҫәлән, намаҙ уҡырға теләмәйһең икән - уҡыма, тип раҫлай. Сәйәси ислам - ул ҡан ҡойош, һуғыш, ҡиммәттәрҙең үҙгәреүе.

Өфө ҡалаһының "Ихлас" мәсете имам-хатибы Мөхәмәт Ғәлләмов милли математика, милли ҡабатлау таблицаһы булмаған кеүек, милли, Рәсәй исламы булмауын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Милли ислам тураһында һүҙ күтәреүселәр, ғәҙәттә, территориаль бүленештән сығып фекер йөрөтә. Уларҙы кемдендер ҡулланылышҡа индереп ебәреүе генә шарт һәм был йәмғиәттәге ниндәйҙер бер сәйәси алым да булып торған кеүек. Нисек кенә булмаһын, Мөхәмәт Мостафа улы билдәләүенсә: "Дин - ул милләтте һаҡлаусы. Туған телеңде белмәй тороп, динеңде белергә, яратырға мөмкин түгел. Бәйғәмбәребеҙ ҙә: "Балаларға телде өйрәтмәгеҙ, уны һөйҙәртегеҙ", - тип юҡҡа әйтмәгән".

Сығыш яһаусылар диндең һәм уны өйрәнеүҙең төрлө аспекттарын ҡараны, шулай ҙа төп һорауға аныҡ яуап әҙләүселәргә Башҡортостан Республикаһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының ғилми хеҙмәткәре Руслан Ҡарамышевтың сығышы ниндәйҙер кимәлдә асыҡлыҡ индерер, моғайын. "Традицион ислам тигәндә, тәү сиратта, "Нимә ул традиция?" тигән һорауға яуап эҙләйек. Ҙур совет энциклопедияһында аңлатылыуынса, традиция - оҙайлы ваҡыт айырым йәмғиәттә, синыфтарҙа һәм социаль төркөмдәрҙә һаҡланған һәм быуындан-быуынға тапшырылған социаль һәм мәҙәни мираҫ элементтары; улар социаль мираҫ (матди һәм рухи ҡиммәттәр) объекттарын; социаль мираҫ процестарын, уның ысулдарын үҙ эсенә ала. Традиция булып йәмғиәттә билдәләнгән ҡағиҙәләр, үҙ-үҙеңде тотоу нормалары, ҡиммәттәр, идеялар, ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар һ.б. тора. Ошо күҙлектән ҡарағанда, был аңлатмаға традицион ислам тап килә. Әммә совет власы йылдарында бик күп традициялар, шул иҫәптән дини йолалар ҙа онотолоуға дусар ителеп, өҙөлөп ҡалды. Мосолмандарҙың динде хәҙерге тергеҙеүе - ул яңы традиция, әммә ул совет власы йылдарындағы традициялар менән тап килмәй. Дин әһелдәре араһында ла традицион ислам тураһында фекерҙәр тап килмәй".

Руслан Дияс улы белдереүенсә, Рәсәйҙең бер генә законында ла традицион ислам тураһында һүҙ юҡ. Былтыр ҡабул ителгән 2025 йылға тиклемге экстремизмға ҡаршы тороу стратегияһында ла экстремизмға ҡаршы эшләүсе төбәк ойошмаларына дәүләт ярҙамы күрһәтеү, Рәсәйҙең традицион ҡиммәттәре, традицион конфессиялар тураһында һүҙ бар, әммә традицион ислам тураһында һүҙ юҡ. Шулай уҡ дин дәүләттән айырылған һәм бер генә дин дә мотлаҡ тип көсләп тағылмай, дин тотоу һәр кемдең ихтыярында, улар барыһы ла закон алдында, юридик килеңктә тиң хоҡуҡлы. Әлеге ваҡытта традицион ислам тигән термин индерелгән бер нисә проект бар, әммә улар ҡабул ителмәгән. Йәғни, төптән уйлап ҡарағанда, ислам - ул донъяуи дин, сөннәт һәм Рәсәй исламы, традицион ислам тигән төшөнсә юҡ, ә ул бары тик идеологема. "Идеологема - халыҡтың уҙаңын формалаштырыусы ҡараштар һәм ҡуҙаллауҙар берлеге булараҡ, йүнәлеш биреүсе һәм туплаусы идеологияның бер өлөшө. Идеологема дәүләттең хакимлыҡ итеүсе социаль төркөмөнөң мәнфәғәте һағында тора. Ул сәйәсәт һәм сәйәси прагматика менән бергә үҙгәрә. Әгәр бөгөн традицион ислам идеологема булып тора икән, ул ҡайҙалыр теркәлергә тейеш, - тине Руслан Ҡарамышев. - Әлегә был билдәләмә лә аныҡ түгел, ул төрлөсә ҡабул ителә һәм унда миллилек күренеше лә төҫмөрләнә. Шуға ҡарамаҫтан, был терминды теркәү һәм уны артабан аңлы рәүештә ҡулланыу ихтыяжы бар. Бөгөн, Көнбайышта һәм Көнсығышта күҙәтелгән ваҡиғалар фонында Рәсәй исламы, традицион ислам тоторҡлоҡ флагманы булып торорға, дин дәүләттең социаль партнерына һәм союздашына әйләнергә тейеш".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәмғиәткә Рәсәйҙең традицион исламы кәрәкме? Эйе, кәрәк, әммә ул дөйөм бер ҡарашты, йүнәлеште күҙаллырға тейеш. Бында инде йөктө яңҡҡа тартырға түгел, ә йәштәрҙе традицион структураға ылыҡтырыу буйынса бер йүнәлештә эшләү зарур. Йәштәргә һәр саҡ революцион идеялар, тормошто, тирә-яҡ мөхитте үҙгәртеү теләге хас. Уларҙың ошо ташып торған энергияһын кирегә, емереүгә түгел, ыңғай яҡҡа, төҙөү, булдырыу йүнәлешенә бороу өсөн кәрәк.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

✓ Һеҙҙең принцибығыҙ - дөйөм өҫтәлгә вегетариандар ризығын ҡуйыу, ә маҡсатығыҙ - кешеләргә йәшелсә ризыҡтарының ни тиклем тәмле булыуын күрһәтеү һәм кемделер шәкәр һәм карбонаттарҙан баш тартырға мәжбүр итеү.



КИТАБЕННАС



# АҢЫҢДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында

**Ливан яҙыусыһы Хәлил Джебрандың "Бәйғәмбәр" исемле был китабы XX башында донъя күргән. Китап бынан ике быуат элек яҙылһа ла, ундағы фекерҙәр уҡыусы күңелендә шаңдау таба, аңды яҡтырта. Үҙегеҙ уҡып ҡарағыҙ.**

### "Беҙҙең закондар тураһында ни әйтерһең?" тип һораған адвокат...

Бәйғәмбәр былай тип яуап биргән: "Яңынан-яңы закондар сығарыу һеҙгә - ләззәт, уларҙы боҙоу - тағы ла ләззәтлерәк. Океан ярындағы балалар ҡом менән шулай уйнай: башта ҡомдан матур һарай төҙөйҙәр ҙә, аҙаҡ рәхәтләнеп ваталар. Һеҙ ҙә ҡомдан һарай төҙөгән мәлдә океан яңынан-яңы ҡом өйөмөн сығарып өйә, ә аҙаҡтан, емерелгән һарайға ҡарап, һеҙҙең менән бергә көлә. Ысынында, океан һеҙҙең бер ҡатлылығыҙҙан көлә. Ә тормошо океандай киң булмағандарға, закондарҙы таш кеүек ҡабул иткәндәргә ни эшләргә? Бейеүҙе күрә алмаған ғәриптең хәлен нисек аңларға? Тиреһен ташлай алмаған ҡарт йыландың тиреһен ташлай алғандарҙан, шәрә заттар, тип, көлөүен нисек аңларға? Туйға башҡаларҙан алда килеп, туйып алғас, һуң килгәндәрҙе тәртип боҙоуҙа ғәйепләп, алдан сығып киткәндәр менән ни эшләргә? Ундайҙар, башҡалар менән бер үк ҡояш нурында ҡойонһа ла, ҡояшҡа арҡаларын ҡуйған, алдында тик күләгәләрен генә күрә һәм уны закон һымаҡ ҡабул итә. Ҡояш ундайҙар өсөн тик күләгә тыуҙырыусы ғына. Ә һеҙҙе, ҡояшҡа ҡарап атлағандарҙы, ерҙәге күләгәләр туҡтата буламы һуң? Елдәр менән дуҫ булғандарға юл күрһәтеүсе флюгер кәрәкме ни? Башҡаларҙың күнел-төрмәһенә инмәһәгеҙ, кешеләр үҙҙәре уйлап тапҡан ниндәй закон һеҙҙе ҡурҡыта алыр? Барабан тауышын туҡтатырға, лираның (ҡыллы музыка ҡоралы) ҡылдарын бушатырға була, ә күктәге һабантурғайҙы йырлауынан кем туҡтата ала?"

### "Беҙгә камил аҡыл һәм нәфсе тураһында һөйлә", тип үтенгән ғибәҙәтхана кешеһе...

"Һеҙҙең күңелегеҙ аң менән нәфсе һуғышҡан яу яланына оҡшаш, - тигән Бәйғәмбәр. - Әгәр ҙә мин күңелегеҙҙә татыулыҡ урынлаштырыусы булһам, аң менән нәфсе көрәшенән матур бер моң яһар инем. Ләкин һеҙ үҙегеҙ күңелегеҙҙә татыулыҡ теләмәгәс, аң менән нәфсенең икеһен дә берҙәй яратмағас, мин бер ни ҙә ҡыла алмайым. Һеҙҙең аңығыҙ менән нәфсегеҙ бер караптың руле һәм елкәне һымаҡ. Әгәр ҙә уларҙың береһе ватылһа, һеҙ тормош океанында маҡсатһыҙ аҙашып йөрөгән фрегатҡа оҡшап ҡалаһығыҙ. Сөнки нәфсеһеҙ аҡыл ҙур көскә эйә булһа ла, уның сиге бар, ә аҡылһыҙ нәфсенең сиге юҡ, ул янып юҡҡа сығасаҡ. Шуға күрә, аҡылығыҙ шундай сикһеҙ юғарылыҡҡа менһен - күңелегеҙ йырлағандай булһын. Нәфсегеҙгә аҡыл йүгән булһын, янып көлгә әйләнгән хәлдә лә, нәфсегеҙ яңынан ҡабынһын. Аҡылығыҙ менән нәфсегеҙгә ҡәҙерле ҡунаҡтарға ҡараған һымаҡ ҡарағыҙ. Сөнки табында ҡунаҡтарҙың береһен икенсеһенән юғарыраҡ ҡуйһағыҙ, икеһенең дә хөрмәтенән мәхрүм булырһығыҙ".

**Исмәгзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Имен тормош фәлсәфәһе

### Ни өсөн эҙмә-эҙлекле булырға кәрәк?

Имен тормоштоң төп шарты - эҙмә-эҙлелек. Ул үҙегеҙ теләгән ергә, йәғни юғары маҡсатҡа алып киләсәк. Йәғни, мөһим тип һанаған принциптарығыҙға ярашлы һәм үҙегеҙ ышанған, ҡәҙерле булған ҡиммәттәр нигеҙендә ғәмәлдәр ҡылып, маҡсатығыҙға өлгәшеүегеҙҙе аңлата. Уны ысынбарлыҡта тормошҡа ашырырға өйрәнеү өсөн философик көйләнештә булырға, фәлсәфә, маҡсат, принциптар һәм ҡиммәттәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе өйрәнергә тейешбеҙ. Был һүҙҙәрҙең барыһы ла һеҙгә яҡшы таныш, әммә, әйҙәгеҙ, нимә һөйләгәнебеҙҙе аныҡ билеүебеҙгә инанайыҡ.

Һеҙҙең ҡиммәттәрегеҙ - идеаль һәм камил тормошта барыһы ла нисек булырға тейеш икәнлеген күҙаллауығыҙ ул. Ғәмәлдә донъяның идеаль түгеллеген иҫәпкә алһаҡ та, беҙгә ошо ҡиммәттәргә ярашлы йәшәргә кәрәк.

Принциптар - тормоштағы ҡиммәттәрегеҙҙең сағылышы. Икенсе төрлә әйткәндә, һеҙҙең тәртибегеҙҙе күрһәтеүсе әхлаҡи һәм этика нормалары. Шуға күрә, әгәр рәхмәтле булыу һеҙҙең өсөн ҡиммәт булып торһа, уның ысынбарлыҡтағы сағылышы - килемегеҙҙең ундан бер өлөшөн мәрхәмәтлеккә биреүегеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡиммәттәр ҙә, принциптар ҙа таш ҡая кеүек үҙгәрмәҫкә лә мөмкин, әммә ниндәйҙер ҙур ваҡиғалар уларҙы үҙгәртеүе лә ихтимал (йәшәү менән үлем араһы, бала тыуыуы һ.б.). Әммә ҡиммәттәрегеҙ ел ҡайһы яҡтан иҫә - шул яҡҡа үҙгәреп тора икән, башығыҙға бик күп проблемалар ябырыласаҡ.

Тормош маҡсатығыҙ - был донъяны яҡшыраҡ, уға ҡиммәттәрегеҙ һәм идеалдарығыҙға ярашлы йәшәргә ярҙам итеү. Йәғни маҡсатығыҙ - көн уҙғарып ҡына йәшәү түгел, ә үҙ тормошоғоҙҙо тамырынан үҙгәртергә ынтылыу ул. Уға шундай күҙлектән сығып бағығыҙ: донъя - ҙур өҫтәл. Һеҙ файҙалы, туклыҡлы йәшелсәләрҙе үҙ итәһегеҙ һәм күпселектең ошо фекерҙә булыуын теләйһегеҙ, уларҙың яһалма эшләнгән ризыҡ ашауына риза түгелһегеҙ. Шулай итеп, һеҙҙең принцибығыҙ - дөйөм өҫтәлгә вегетариандар ризығын ҡуйыу, ә маҡсатығыҙ - кешеләргә йәшелсә ризыҡтарының ни тиклем тәмле булыуын күрһәтеү һәм кемделер шәкәр һәм карбонаттарҙан баш тартырға мәжбүр итеү. Әгәр һәр кем төп ҡиммәт итеп үҙенең бәхетен генә һанаһа һәм ысынлап та бәхетле булырға ярҙам иткән принциптар буйынса ғына йәшәһә, донъя иҫ киткес матур булыр ине!

Ашыҡмағыҙ, беҙ бит әле философияның нимә икәнен аңламаныҡ. Мин уны фекерләүҙең логик системаһы - тәнҡит фекерләүе - теге йәки был күренештең тәбиғәте, сәбәптәре, принциптары тип билдәләйем. Был осраҡта беҙ уңышлы тормош фәлсәфәһе тураһында һөйләшәсәкбеҙ. Икенсе төрлә әйткәндә, һеҙҙең фәлсәфә - ҡиммәттәрегеҙ, принциптарығыҙ һәм маҡсатығыҙ барыһы бергә. Ул һеҙҙең тормошоғоҙҙоң әлеге мәлдәге нигеҙе. Тормошта маҡсатығыҙға өлгәшеү һәм уға тоғро булып ҡалыу өсөн эҙмә-эҙлеклелек философияһы буйынса йәшәргә тейешһегеҙ. Философиягыҙ ҡиммәттәрегеҙгә тап килгән принциптарығыҙға нигеҙләнгән маҡсатығыҙҙы һүрәтләй. Былар барыһы ла һеҙҙе кем булып торһағыҙ - шундай итә.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ЙОМАҒӘЛЕ ОЛАТАЙ

**1934 йылдың йәйендә Ҡашҡар ауылы урамдарының саңын борлатып, тәүге тапҡыр автомобиль уҙа. Әйтергә лә түгел, ауыл халҡы өсөн был хәл оло ваҡиғаға тиң була, барыһы ла тамаша ҡылырға урамға һирпелә. Әммә ни хәл, тимер ат йылғаны аша сыға алмай, батҡыл урында туҡтап ҡала. Өлгөр малайҙар ярҙамға йүгерә. Этеп сығаралар автомобилде. Рәхмәт йөҙөнән шофер йәш ярҙамсыларҙы машинаға ултыртып йөрөтә...**




Тап шул мәлдә "Эх, мин дә ҡасан да булһа машина йөрөтһәм ине!" тигән уй 11 йәшлек Йомағәленең күнел түренә үтеп инә. Шул көндән башлап ул бар эштәрен ошо хыялына бағышлай. Дәһшәтле һуғыш күпме кешенең хыялын селпәрәмә килтерҙе икән? Миллионлап та иҫәпләп булмайҙыр уларҙың һанын. Йомағәлегә лә изге ниәте менән хушлашырға тура килә. 1942 йылда 18 йәше лә тулып өлгөрмәгән егет үҙ теләге менән фронтҡа оҙатыла. Уны 23-сө гвардия уҡсылар дивизияһының 66-сы уҡсылар полкына айырым автоматсылар ротаһына билдәләйҙәр. Һуғыштың әсе-сөсөһөн тулыһынса татырға тура килә рядовой Баязитовҡа - гел йәш һалдаттарҙан торған ротаны һәр саҡ ауыр, хәүефле участкаларға ебәрәләр. Ҙур стратегик әһәмиәткә эйә булған бер ҡалҡыулыҡты алыуҙа Йомағәле бигерәк тә ҡыйыулыҡ күрһәтә. Быны өсөн ул "Батырлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ була.

1944 йылдың ҡышында иһә Белоруссия ерендә уларҙың часына һаҙлыҡлы ерҙән үтергә тура килә. Ярай кемдер быйма кейгән, ә бына итек кейгән һалдаттарға айырыуса ауырға тура килә. Күптәр аяҡтарын тундыра. Үкенескә, Баязитов та улар иҫәбендә була. Эвагоспиталдә уның аяҡтарының бармаҡтарын ҡырҡып ташларға мәжбүр булалар. Ә был - шофер һөнәре тураһында уйларға ла ярамай тигән һүҙ...

Кешене өмөт йәшәтә, тиҙәрме әле? Йомағәле тормош һынауы алдында һис тә баш эйергә теләмәй. Ауылына ҡайтҡас, тәүҙә велосипедта, артабан мотоциклда йөрөргә өйрәнә. Ни ғәләмәт, тора-бара аяҡтары элеккеләй борсомай башлай. Шул саҡ ул Хәйбулла районы Һамар ауылындағы автомәктәпкә уҡырға барырға тәүәккәлләй - уҡырға алыуҙарына өмөт әҙ, әммә тырышып ҡарарға була бит. Ҡабул итәләр. Күп тә үтмәй, маҡсатлы егет ҡулына таныҡлыҡ алып, "Башмедстрой"ҙа эш башлай.

Хаҡлы ялға сыҡҡансы ул яратҡан һөнәренә тоғро ҡала - был йылдар эсендә уға Йылайыр районының төрлө ойошмаларында эшләргә тура килә. Һәр ерҙә Йомағәле Баязитовты намыҫлы, тырыш кеше булараҡ танығайҙар, хеҙмәтен бихисап почет грамоталары менән билдәләйҙәр.

1964 йылда һөйөклө ҡатыны Хаят береһенән-береһе кесерәк 7 бала менән ҡалдырып, баҡыйлыҡҡа күсә. Әммә яҙмыш Йомағәлегә тағы ла ғаилә бәхете бүләк итә - шул уҡ йылда ул Мөслимә исемле ҡыҙ менән никахлаша. Уларҙың тағы ла уртаҡ ике балалары тыуа.

"Атайым һуғыш йылдары тураһында хәтерләргә ратмай ине, - тип хәтерләй кесе ҡыҙы Алһыу , - хәҙерге тыныс тормош өсөн шөкөр итеп йәшәне, бөгөнгөнө дәһшәтле йылдарҙан өҫтөнөрәк ҡуйҙы. Бик тура һүҙле, кеше һүҙенән ҡурҡмаҫ кеше булды атайым. Ошо һыҙаты өсөн уны ауылда ололап "прокурор" тип йөрөттөләр. Ниндәйҙер бәхәс килеп сыҡғаны - оло-кесеһе кәңәш һорап уға килә". Кәңәш артынан ғына түгел, ярҙам һорап та күп мөрәжәғәт итәләр Йомағәлегә. Бигерәк тә техникаға ҡағылышлы һорауҙар менән. Ни тиһәң дә, ауылдың иң тәжрибәле шоферы - ул, өҫтәүенә, бер ҡасан да үтенесте кире ҡаҡмай, ҡулынан килгәнсә ярҙам итә. Әйткәндәй, шофер һөнәренә ул балаларында ла һөйөү тәрбиәләгән - Салауат, Ғәли һәм Хәсән улдары ғүмерҙәрен ошо һөнәр менән бәйләй, һәр бер ҡыҙына тиклем бөгөн машина йөрәтә.

Хаҡлы ялға сыҡҡас та олатай ҡул ҡаушырып ултырмай, ауылдың хужалыҡ йортонда ҡараусылыҡ булып эшләй. Велосипедта йөрөй, яратҡан шөғөлдәре волейбол һәм шахмат уйындарынан да айырылмай.

1993 йылдың 19 августында 69 йәшендә ҡаты ауырып мәрхүм булып ҡала.

Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын билдәләгән йылда Йомағәле олатайҙың күп һанлы балалары, ейәнейәнсәрҙәре ауырыуса күңел йылыһы менән уны иҫкә ала. 18 генә йәшендә йәнен аямай, ил һаҡларға сыҡҡан һалдат Баязитов - улар өсөн өлгө һәм ғорурлыҡ билдәһе.

**Фәйгөл ЙОСОПОВА.**

✓ *Сәскә, гөл һатыусы нөктәләр бихисап хәҙер, ләкин ундағы гөлдәр төрлө химикаттар менән ашланған булыу сәбәпле, бер тапҡыр сәскә атып ҡойолғандан һуң күпселек осраҡта һәләк була. Ә минең гөлдәремә ундай ҡурҡыныс янамай.*



*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ӨЙӨМДӨ ЛӘ ЙӘМЛӘЙ...

## өҫтәмә килем дә килтерә



**Хәҙер эш хаҡына, пенсияһына, стипендияһына өҫтәлмә булырҙай килемле шөғөл эҙләмәгән кеше һирәктер. Мин үҙем хаҡлы ялдамын. Пенсиям ашау-эсеүгә лә, коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә лә етә. Ләкин ейәндәремә ниндәйҙер бүләк эшләүгә, уларҙы ҡайҙалыр алып сығыуға етеңкерәмәй, ә бәләкәстәремде ҡыуандырғым килә. Шуға күрә өйҙә генә башҡарып була торған, күп ваҡыт һәм оло көс талап итмәгән шөғөл табырға тура килде. Унын хаҡында "Киске Өфө" битендә бәйән итергә булдым.**

Элек-электән гөл яратам. Йәш саҡта йәшәгән бәләкәй генә бүлмәбеҙҙә лә, унан һуң фатирыбыҙҙа ла һәр саҡ күпләп гөл үҫтерҙем. Әле лә был ҡыҙыҡһыныуымды ташламайым һәм әленән-әле гөлдәремде яңы төрҙәр менән байытып торам. Бигерәк тә фиалка гөлө үҫтереү күңелемә яҡын. Уларҙың әллә нисәмә төрлөһөн ҡәҙерләп, наҙлап ҡына ҡарап торам. Нәҡ ошо матур сәскәле гөл миңә пенсияма өҫтәмә килем килтереүсе сығанаҡ булып тора ла инде.

Бер көндө ауылдан килгән әхирәтем фиалканың бер төрөнә һоҡланып ҡарап торҙо ла, уны һатыуымды үтенде. Уға тиклем гөлдәремде һатыу тураһында уйлағаным да юҡ ине, шуға күрә бер аҙ аптырап ҡалдым. Әхирәтем ныҡыш булып сыҡты, ҡулыма аҡсаһын тоттороп, гөләмдө күкрәгенә ҡыҫып ҡайтып та китте. Ошо ваҡиғанан һуң гөлдәр үрсетеп һатыу уйы барлыҡҡа килде. Ниәтемде оҙаҡҡа һуҙманым һәм һөҙөмтәлә өс айҙан арыу ғына аҡса ла эшләнем. Төрлө формалы һәм размерлы, күп төҫлө матур сәскәле гөлдө алырға теләүселәр бихисап булып сыҡты. Берәүҙәр бүләк өсөн, икенселәр өйҙәренә, тип һатып алды. Тейешле ҡарау булғанда һәр ваҡыт тиерлек сәскәгә күмелеп ултырған был гөлдө үрсетеүе лә ауыр түгел. Сәскәндән һуң тиҙ генә үҫкән фиалканың әленән-әле яңы сорттары барлыҡҡа килә һәм был күп төрлөлөк һәр саҡ иғтибарҙы йәлеп итә. Күҙ ҡамаштырырлыҡ матурлыҡ бөркөп ултырған был гөлдө күптәр коллекциялай һәм яңы төрҙәре артынан "һунар" ойоштора. Шуға күрә һатып алыусыларға ҡытлыҡ кисермәйем, айына 10-15 һауыт гөл һатам. Бер һауытын, сортына һәм ҙурлығына ҡарап, төрлө хаҡҡа тәҡдим итәм, ләкин артыҡ хаҡ һорамайым.

Сәскә, гөл һатыусы нөктәләр бихисап хәҙер, ләкин ундағы гөлдәр төрлө химикаттар менән ашланған булыу сәбәпле, бер тапҡыр сәскә атып ҡойолғандан һуң күпселек осраҡта һәләк була. Ә минең гөлдәремә ундай ҡурҡыныс янамай, сөнки уларҙың тупрағында бер ниндәй ҙә химикаттар юҡ. Был да миңә ыңғай ҡараш тыуҙырыуға һәм кәсебемә булышлыҡ итә.

**Нәфисә АБДУЛЛИНА.**

*КАНДИДАТ В ДЕПУТАТЫ*



## САФИН БУЛАТ АНВАРОВИЧ

**кандидат в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан третьего созыва по одномандатному избирательному округу №2, адвокат Коллегии адвокатов Республики Башкортостан "Муратов и партнеры"**

# ВИЖУ ДАЛЬШЕ МНОГИХ

### Уважаемые избиратели!

**Если вы дочитаете этот текст до конца, я буду считать ненапрасным свое решение предоставить жителям Уфы право решать - быть мне депутатом нашего городского Совета или же нет.**

Я родился в 1984 году в обычной российской семье. Отец всю жизнь проработал милиционером, пройдя путь от рядового эксперта до начальника ЭКЦ МВД. Мама посвятила свою жизнь преподаванию химии в средних школах и гимназиях, она обучила не одно поколение детей, ставших врачами, криминалистами, рабочими, и даже учеными.

С малого детства меня приучали к труду: я прекрасно знаю, что значит прополоть тридцать соток картофельного поля, выкосить поле, а потом с наслаждением выпить деревенского молока с хлебом. В двенадцать лет я потерял зрение. Благодаря поддержке родителей, друзей и родственников я не опустил руки и продолжил жить дальше. Обучался в специальном учреждении для слепых и слабовидящих, а потом закончил с золотой медалью обычную общеобразовательную школу №18. В 2002 году поступил на бюджетной основе в Институт права БГУ, который закончил с красным дипломом. В период обучения я активно занимался общественной деятельностью: организовал выпуск ежемесячной институтской газеты, участвовал во множестве конференций. За отличную учебу, активную общественную деятельность был награжден именными стипендиями президента Республики Башкортостан, В. Потанина, И. Муксинова. После окончания университета меня приняли стажером в Коллегию адвокатов РБ "Муратов и партнеры", а уже в 2009 году я приобрел статус адвоката. За всю мою адвокатскую практику нет ни одного клиента, оставшегося недовольным моим трудом. Я считаю, что главное в работе адвоката - честность, добросовестность, пунктуальность, постоянное повышение уровня знаний. К сведению, я работаю на компьютере при помощи специальной озвучивающей программы, что позволяет мне его использовать, как и людям без дефектов зрения. Также у меня есть помощник, который помогает мне передвигаться по судам и выполняет различную техническую работу. Обычно многие интересуются, как я, потеряв зрение в 12 лет, без блата и взяток добился положения в обществе, финансового благополучия, семейного счастья?

Если рассказывать о личной жизни, то я могу сказать только одно: я счастливый отец замечательной дочки и муж прекрасной, доброй и понимающей жены. Что мне помогает в жизни? Стремление познать новое, выполнить работу и видеть ее положительные результаты. Если работы нет, то надо ее искать, и это тоже работа. Считаю, что только так человек сможет реализоваться.

**Почему я предлагаю отдать свой голос мне - незрячему жителю Уфы?** Чтобы видеть проблемы, которые нас окружают, не нужно быть зрячим. Работая шесть лет адвокатом, я постоянно отстаиваю права горожан в их отношениях с различными

органами власти. Традиционные, к сожалению, уже набившие оскомину темы, коммунальных услуг и управляющих компаний с нарисованными цифрами в платежках. Аварийное и ветхое жилье, отказы в постановке на очередь в качестве нуждающихся в улучшении жилищных условий. Ежегодные дыры в асфальте, залатываемые под освоение бюджета в дождь и снег. Транспортный коллапс из-за некомпетентных водителей и древних автобусов. Поликлиники не для врачей и не для людей. Школы со смешными зарплатами и смешным уровнем образования. Полиция, вынужденная половину рабочего времени отписываться от проверяющих. Кстати, вы знаете своего участкового?

**Как разрешить эти и многие другие повседневные и важные проблемы города?**

Я убежден, добросовестный труд каждого человека, доброжелательное отношение к людям, работа чиновников для людей, желание работать на долгосрочное развитие, стимулирование со школы желания достичь своим трудом успеха, вера в человека и помощь в реализации его созидательных идей - все это залог благосостояния каждого жителя Уфы и города в целом.

Уфе нужны конкретные краткосрочные и долгосрочные планы развития, открытые для граждан и создаваемые при их участии.

**Как реализовать все лозунги, которыми пестрят газеты перед выборами?** Может быть, избранному депутату не стоит забывать про тех, кто его избрал? Вероятно, стоит просто честно работать? Голосовать против "освоения бюджетных средств", контролировать действия чиновников города? Возможно, следует принимать горожан, поверивших в агитационные посулы в заранее объявленные дни приема, не отписываясь формально, а реально помогая людям?

**Я убежден, что городу необходимы продуманные долгосрочные проекты развития:**

- Уверен, что инициатива строительства моста через р. Уфимка в Калининском районе Уфы получит одобрение и поддержку со стороны руководства города и республики. Этот проект позволит трудоустроить многих уфимцев и дать новый толчок в развитии района, разгрузить дороги, сделать пригородные земли доступными для ведения жителями города садоводства.
- Благоустройство города Уфа. Ведь город - это наш дом. Дом, в котором мы живем, в который приезжают гости. Прошедшие международные саммиты показали направления развития городской инфраструктуры. К сожалению, благоустроены не все части города и работа в этом направлении не должна прекращаться. Очень важна реализация программы "Доступная среда" для людей с ограниченными возможностями, да и для каждого уфимца было бы приятно жить в комфортном и уютном зеленом городе.
- Совместная разработка программ модернизации УМПО, других заводов города, выпуск новых товаров широкого потребления, пользующихся спросом у граждан страны. Почему мы должны покупать китайские и европейские товары, отдавая свои деньги иностранным производителям?

**Я предлагаю вам провести эксперимент:** сможет ли сделать незрячий адвокат то, что не могут сделать зрячие чиновники. Дать мне шанс доказать, что я честен в словах и добросовестен в работе.

За годы активной работы адвокатом я пришел к глубокому убеждению, что в большинстве дел судебным решением по сути спор, возникший между гражданами, между гражданами и чиновниками окончательно разрешить невозможно. Спор может быть решен путем изменения мнения и отношений людей друг к другу и определенной проблеме. Мотивация и отношения между людьми зависят от их мировоззрения. Мировоззрение в свою очередь формируется обществом. Лишь создание благоприятного общественного фона жизни людей, восстановление этических норм, норм морали и культуры труда является способом уменьшения количества разногласий между отдельными гражданами в частности и между различными слоями населения, в общем. Для возможности оказания влияния на развитие общества законодателем предусмотрен институт - политическая партия.

Мое желание реализовать себя в деятельности политической партии связано во многом и с тем, что, имея богатый опыт юридической деятельности, работая с большим количеством граждан и юридических лиц, считаю, что мои знания помогут обществу в его развитии. Немаловажным является и то, что каждый человек, желающий лучшей жизни для себя, своих детей и семьи, для страны, должен за свою жизнь внести весомый вклад в развитие страны. Первым шагом является отличное обучение и добросовестный труд. Вторым шагом является участие в политической жизни страны, как избирателем, так и активным деятелем. К последнему я стремлюсь, однако, не в целях "власти ради власти", а в целях самореализации и помощи гражданам.

Я знаю многое о жизни инвалидов и других незащищенных слоев населения - предпринимателей, учителей, врачей, обычных тружеников, о юридической реализации их прав, об их образовании и трудоустройстве, о доступности объектов социальной инфраструктуры. Я могу и желаю внести свой вклад в реализацию всего, что написано на бумаге, но не реализуется, либо реализуется только для своих.

**Почему КПРФ?** Все очень просто - только эта партия дала мне возможность стать кандидатом в депутаты, и не в моих правилах отворачиваться от тех, кто мне когда-либо помог. Мне кажется, что Коммунистической партии в том понимании, в котором она функционировала в период советской власти, сейчас уже не существует. Сегодня это совершенно другая партия. Так зачем создавать новую структуру политической партии, вымучивать псевдолозунги, если все давно придумано - просто нужны новые, энергичные и честные люди, новые идеи.

**Уважаемый избиратель, дай мне Совет - городской Совет города Уфы Республики Башкортостан в обмен на мое слово - честно трудиться и помогать жителям города. Ведь я вижу дальше многих.**

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г.Уфа Республики Башкортостан третьего созыва Сафину Булату Анваровичу согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006 г. N 380-з "О выборах".

*ШАНДАУ*

# "ҠАТЫ ИКӘН ЙЫЛАН ҠАРҒЫШТАРЫ"



**Таңһылыу Бәһауетдинованың һәм Рафаэль Атауллиндың гәзиттең бер нисә һанында баҫылған "Ҡаты икән йылан ҡарғыштары" тигән мәҡәләләрен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып барҙым. Үҙем дә йыланға бәйле ишеткән-күргәндәремде бәйән итмәксе булдым.**

Педучилище тамамлағас, мине юллама буйынса Бүздәк районына эшкә ебәрҙеләр. Ҡаранай ауылында Рәйсә һәм Тимерғәли Ғәлимовтарҙа фатирҙа йәшәнем. Рәйсә әбей һөйләгәндәр хәтерҙә ныҡ уйылып ҡалған. "Элек бер байҙың тоғро хеҙмәтсеһе булған, - тип һөйләгәйне ул. - Ул шул тиклем эшкә шәп булған: көтөүен дә көткән, хужалыҡ эштәрен дә башҡарған. Бер ваҡыт был күҙгә күренеп ябыға башлаған, эшкә лә һүлпәнәйгән, ашағаны ла йоҡмай, ти, тик эсе генә ҙурая бара икән. Ашай ҙа йоҡлай ҙа китә, ти. Хужаның шундай тырыш хеҙмәтсеһенән ҡолаҡ ҡаҡҡыһы килмәгән. Берҙән-бер көндө ат егеп, алыҫтағы бер ауылға күрәҙәсегә алып киткән тегене. Күрәҙәсе шунда уҡ эштең ниҙә икәнен аңлап алған. Эсенә йылан ингәнлеген әйткән һәм нисек ҡотолоу юлын өйрәткән. Баҡһаң, хеҙмәтсе көтөү көткәндә ятып торған һәм йоҡлап киткән, төшөндә һалҡын һыу эсергә ынтылам тигәндә, уянып киткән. Йоҡлаған сағында ауыҙына йылан ингәнен бөтөнләй шәйләмәгән. Күрәҙәсенән ҡайтҡас, ул өйрәткәнсә, бай хеҙмәтсеһенә күп итеп ҡаҡланған ҡаҙ ите ашатҡан, ләкин бер тамсы ла һыу эсермәгән. Шунан хеҙмәтсеһен сылтырап аҡҡан йылға буйына алып китеп, шунда ятып торорға ҡушҡан. Хеҙмәтсеһе иҙерәп йоҡлап киткән, ә бай үҙе ситтән генә күҙәтеп ултыра, ти. Бына бер ваҡыт аҡҡан һыу тауышына хеҙмәтсенең ауыҙынан йылан шыуышып сығып, йылғаға төшөп киткән, ти. Шулай итеп, бер нәмәгә ҡарамай, бай үҙенең тоғро хеҙмәтсеһен терелтеп алған, ти..."

Йылан ҡарғышы, тигәндән, үҙемдең ата-әсәйем һөйләгәндәрҙе лә яҙып үтмәксемен. Миңә өс йәштәр тирәһе, ә ҡустыма бер йәш булған ул ваҡытта. Беҙҙең өйҙөң нигеҙенә бер йылан килә лә ята, ти. Үлтерергә ярамай, тип, атайым уны һәнәккә элеп, ҡаршылағы ереклеккә сығарып ташлаған. Иртәгәһенә теге тағы килеп ятҡас, биҙрәгә һалып, алыҫҡараҡ һыу буйына илтеп ҡалдырып киткән. Йылан яңынан әйләнеп килгән. Өсөнсөһөндә тоҡҡа һалып, йылға аръяғына илтеп ташлаған. Йылан барыбер кире килгән. Аптырағас, өйҙә бәләкәй балалар бар, йә йоҡлағанда ауыҙҙарына инер, тип, үлтерергә булғандар. Шунан киткән дә инде донъялары кирегә: теге бер йәшлек ҡустым үлгән, һыйырыбыҙ зыянлаған, янғын сығып, аласығыбыҙ янып киткән, сәскән картуф уңмаған һ.б. Быларҙың барыһын да шул йыландың ҡарғышынан күргәндәр...

Бик күп йылдар элек үҙем шаһит булған тағы бер ваҡиға һаман тынғылыҡ бирмәй. Бер ваҡыт күрше ауылда йәшәгән апайым менән ауылыбыҙға ҡайтып барабыҙ. Юл урман аша үтә. Ҡапыл ҡаршыбыҙға ҡара йылан килеп сыҡты. Йылан юлды киҫһә, юл уңмай, тигән ырым бар бит халыҡта. Апайым тиҙ генә һуйыл һындырып алды ла, тегене юл аша сығармаҫ өсөн, туҡмап үлтерҙе. Был хәлгә күп тә үтмәй, өс балаһын ҡалдырып, апайым үҙе лә яҡты донъя менән хушлашты...

Йылан арбаусыларға ла ышанам мин. Сәрбиямал өләсәйем өшкөрөү, ҡот ҡойоу менән генә сикләнмәй, йылан да арбай белә торғайны. Уны юллап, тирә-яҡ ауылдарҙан да киләләр ине. Өләсәйемдең йылан саҡҡан Шәйхетдин тигән кешене арбауы тураһында һөйләгәне әле лә хәтерҙә. Йәйге эҫе көндә теге ағай бесәнен әйләндергән дә, әҙерәк елләгәнсе ятып торған икән. Шунда уны йылан саҡҡан. Ул йүгереп өләсәйемә килгән. Башы тубалдай шешкән, бите ҡып-ҡыҙыл, ти. "Арбауы бигерәк ауыр булды. Үҙемде йоҡо баҫа, иҫнәй-иҫнәй яңаҡтарым ҡарышып бөттө", - тип һөйләй торғайны.

Был ваҡиғалар минең тыуған яғым Белорет районы Манышты ауылында булған.

**Мәхмүзә ШӘҒӘЛИЕВА,**
**педагогик хеҙмәт ветераны.**
**Бүздәк районы Ҡанны-Төркәй ауылы.**

АФАРИН!

# ЕҢЕҮ ӨСӨН ТЫУҒАНДЫР...

**Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылында урынлашҡан "Сулпылар" балалар баҡсаһы - бала саҡтың бәхетле утрауы. Унда кескәйҙәр тәрбиәселәрҙең йөрәк йылыһын тойоп, улар ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙҙе йотоп, матурлыҡты, изгелекте танырға, тыуған ерҙе яратырға өйрәнеп үҫә. Тәү тапҡыр илап, көйһөҙләнеп тупһа аша үтеүселәр ваҡыт үтеү менән ҡыйыу, тәүәккәл балаға әйләнеп, мәктәпкә китә.**



Был мәҡәләлә һүҙебеҙ шундай бәләкәстәребеҙҙең береһе, тәбиғәттән һәләтле тәрбиәләнеүсе Розалия Аҫылғужина тураһында булыр. Әлегә биш йәшлек кенә булыуына ҡарамаҫтан, ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшкән, тағы ла юғарыраҡ маҡсаттарға ынтылып йәшәгән ҡыҙыҡай - беҙҙең балалар баҡсаһының бәләкәй генә "йондоҙо" ул. Был ҡыҙҙың матур сифаттарын һанап бөтөрлөк түгел. Баҡсабыҙҙа һәм ауылыбыҙҙа үткәрелгән барлыҡ мәҙәни сараларҙа әүҙем ҡатнашып ҡына ҡалмай, ул район, республика, хатта Рәсәй кимәлендәге конкурстарҙа ла үҙен һынап ҡарай һәм призлы урындар яулай. Мәҫәлән, үтеп киткән уҡыу йылында ғына ул бихисап конкурстарҙа ҡатнашты: район үҙәгендә үткәрелгән, балаларҙың ижади һәләттәрен асыусы һәм үҫтереүгә булышлыҡ итеүсе "Бәхетле баласаҡ" тип аталған район һүрәт төшөрөү конкурсында Гран-при яуланы. Районда быйыл тәү тапҡыр мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр ярышы үткәрелде. Розалия был саранан да ситтә тороп ҡалманы. Кескәй генә ҡыҙыбыҙҙың эпосты көйләп, илһамланып, тасуири итеп ятлауы барыһын да таң ҡалдырҙы һәм беренсе урын алыуға булышлыҡ итте. Баймаҡ ҡалаһының йәш натуралистар станцияһы тарафынан үткәрелгән "Эх, был һоҡландырғыс әкиәттәр!" конкурсында ла һынатманы унған ҡыҙыбыҙ - тоҙло ҡамырҙан "Шалҡан" әкиәте геройҙарын әүәләп, еңеүсе тип табылды.

Район кимәлендә Розалия үҙен һәйбәт һүрәт төшөрөүсе, тел һәм ҡул оҫтаһы итеп танытһа, әлеге ваҡытта ул республикабыҙҙың "Сулпылар" йыр-моң конкурсы финалисы. Конкурсҡа ныҡлы, шул уҡ ваҡытта мауыҡтырғыс итеп әҙерләнеүе һайлап алыу, беренсе һәм икенсе турҙарҙы уңышлы үтеүгә алып килде. Үҙен сәхнәлә ышаныслы тотоуы, үҙенсәлекле тауышы, сағыу һәм тематикаһына тура килгән кейемдәр кейеүе менән жюри ағзаларын хайран ҡалдырҙы. Һәләтле ҡыҙыбыҙ был юлы ла һынатмаҫ тигән өмөттә ҡалабыҙ.

Ҡыҙ баланы тәрбиәләү - атайҙан да, әсәйҙән дә йөрәк көсө, иғтибар, яуаплылыҡ талап иткән ҡатмарлы бурыс. Шуға күрә Розалияның уңыштарында ата-әсәһе Гөлназ Фазулла ҡыҙы һәм Илдар Урал улы Аҫылғужиндарҙың да өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Ныҡлы, аҡыллы, ятраҡан ата-әсә тәрбиәһендә үҫкән ҡыҙ Хоҙайҙың иң оло ҡөҙрәтенә эйә булалыр. Артабан да уңыштары менән ата-әсәһен һөйөндөрөргә яҙһын!

**Фәниә ХӨСӘЙЕНОВА.**
**Баймаҡ районы.**

АТЫҢ КЕМ?

# НАДИР, ИҘЕЛ, РАМАҘАН -

## бына беҙҙең көс ҡайҙан!

**Бынан теүәл бер йыл элек тормошобоҙға йәм өҫтәп, Стәрлетамаҡ ҡалаһында Яхиндар һәм Рахманғоловтарҙың нәҫел ебен дауам итәсәк сабыйҙар донъяға килде.**

Ейәнем Яхин Надир Динар улы, исеменә есеме тап килмәксе, бер эш ҡылырҙан алда күҙҙәренә ныҡ итеп ҡарай (йәнәһе лә, ышанып буламы был кешегә, юҡмы), шкаф ишеген асырға булһа ла, тәүҙә һаҡ ҡына тотҡосты тота, үрелеп ҡарай, шунан ғына шар аса. Туған телебеҙҙә әйткән һәр һүҙе, хәрәкәте күңелде әйтеп аңлатҡыһыҙ шатлыҡ-ҡыуаныстарға күмә.

Туғанымдың ейәне Иҙелбайыбыҙ, ҡарт олатаһы Рәйес кеүек, әллә йырға маһир булмаҡсы инде, һәр хәлдә, ҡасандыр мул һыулы Ағиҙелебеҙҙәй, эсе тулы моңға һөйөү. Машинаға кереп ултырыу менән музыка ҡуйыуҙы талап итә башлай. Йыр ишетһә инде иларға ла онота хатта, ауыҙ асып тыңлай башлай. Унын был йомшаҡ яғын һиҙеп ҡалған йәш ата-әсәһе Айбулат менән Гөлнара сабыйҙарын нисек еңергә, ниндәй нөктәгә баҫырға белә хәҙер.

Һуңғы ваҡытта күп йәштәрҙең исем һайлауға етди ҡарауы шатландыра. Яңыраҡ "Таҙалыҡ шишмәһе" профилакторийында йәш йырсы Салауаттың (ҡыҙғанысҡа ҡаршы, фамилияһын иҫкә төшөрә алманым) ғаиләһе менән таныштым. Улдары Рамаҙан шул тиклем матур итеп башҡортса һөйләшә, сабый ғына булыуына ҡарамаҫтан, тәрән фекер йөрөтә белә. "Үҫкәс кем булаһың?" тип һорағас, "Букетат!" тип шатландырҙы, рәхмәт төшкөрө. Иншалла, киләсәктә иле, халҡы мәнфәғәтен яҡларҙай, тәбиғәтен ҡурсалай алырҙай, һыу-күлдәре хаҡында яңы закондар ҡабул иттерерҙәй депутат сығыр әле үҙенән.

Хоҙайҙан матур киләсәк, таҙа һыу, һауа, оҙон ғүмер, ата-әсә наҙы яҙһын яңы тыуған сабыйҙарға! Амин!

**Люциә ЯХИНА.**

ЯҢЫ КИТАП

# "МӘКТӘП КАЛЕНДАРЫ"



Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә 2016 йылға "Мәктәп календары" баҫылып сыҡты. Унда уҡыусыларҙың тормошо хаҡында мауыҡтырғыс мәғлүмәттәр, уҡыусыларҙың аң даирәһен киңәйтеүсе тестар, тиҙәйткестәр, йомаҡтар, башватҡыстар бирелгән. Бөтөн материалдар ҙа сағыу һүрәттәр менән биҙәлгән. "Халыҡ табибы", "Йәш таланттар" кеүек рубрикалар уҡыусыларға класс сәғәттәрен һәм кластан тыш сараларҙы ҡыҙыҡлыраҡ һәм һөҙөмтәлерәк ойошторорға ярҙам итер.

Шулай уҡ киләһе йылға йыртма календарь донъя күрҙе. Унда тыуған төйәгебеҙҙең тарихы һәм республикабыҙҙың бөгөнгөһө хаҡында мөһим мәғлүмәттәр тупланған. Һөнәри байрамдарға һәм иҫтәлекле даталарға, билдәле йәмәғәт эшмәкәрҙәренең хеҙмәттәренә ҙур иғтибар бүленгән. Шулай уҡ ҡыҫҡа юморескалар, хикәйәләр һәм шиғырҙар, кроссвордтар, төрлө тестар һәм файҙалы кәңәштәр урын алған.

**Нәркәс КҮРПӘСОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӘЛЕГЕ ЛӘ БАЯҒЫ...

## шул болғатҡыс таяғы

Ҡойошҡаны көмөштөр - ҡолдоң аты ҡол булыр, ҡойошҡаны йүкәлер - бейҙең аты бей булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ярлы кеше бер байға хеҙмәткә яллана. Бай уны баҫыуына алып барып, ни эшләргә икәнен һәм күпме түләйәсәген әйтә. Ярлы эштең көс еткеһеҙ икәнен аңлай, әммә түләүе арыу ғына булғас, ризалаша. Шул аҡса менән ул ғаиләһенең хәлен бер аҙ ғына булһа ла еңеләйтәсәген уйлап ҡыуана. Ләкин бай ҡушҡан эш шул тиклем ауыр була. Һауа торошо ла шәптән булмай: йә ҡоролоҡ тора, йә ямғыр ҡоя, йә көслө дауыл башлана, ти. Хеҙмәтсенең йоҡоһо ла, ялы ла булмай. Ул ҡайһы саҡта ултырып илап алғылай, әммә эшен туҡтатмай, аслыҡ әсеһе ауыр хеҙмәт әсеһенән яманыраҡ икәнен яҡшы белгән була ул. Быуа уңыш йыйып алыу ваҡыты килеп етә. Хеҙмәтсе үҙенең әсе тир емештәрен күреп, беренсе тапҡыр кинәнеү кисерә. Хеҙмәтенә лайыҡлы баһа алыр өсөн бай эргәһенә килә. "Һин минең ышанысты аҡламаның, - тип ҡаршы ала уны бай. - Уңыштың күбеһе ҡоролоҡтан юҡҡа сыҡты, күпмелер өлөшө ямғырҙа серене, күпмелер уңышты дауыл алып китте. Был юғалтыуҙарҙың барыһы өсөн дә мин һинең эш хаҡыңдан тотоп ҡалам, бар ҡатыным эргәһенә, аҡсаны ул түләр". Хеҙмәтсе байҙың ҡатыны янына бара, уныһы бер нисә тинлек сығарып, хеҙмәтсенең усына һала. Тинлектәргә ҡарап алғас, хеҙмәтсенең күҙҙәренән йәш бәреп сыға, ғәрләнеүе бәгерен өтә. Хәлдән тайған һәм ауырыған килеш ул ас ултырған ғаиләһе янына йүнәлә...**

**Байтаҡ ваҡыт үтә, был ваҡиға онотола. Ләкин берҙән-бер көндө байҙың малдары ҡырылыуы, йорто яныуы, балалары ауырып китеүе, ҡатыны вафат булыуы тураһында хәбәр тарала. Ҡайғынан бөлөп, бай Аллаға мөрәжәғәт итә: "Әйт әле, Хоҙай, мин ниндәй ҡылығым менән Һине асыуландырҙым? Мин һин ҡушҡандарҙың барыһын да үтәйем, һиңә табынам, доғалар ҡылам, ә Һин мине язалайһың". "Кеше доғалар менән түгел, үҙенең эше менән үҙ яҙмышын булдыра. Һин кешенекен күпме үҙләштерһәң, шул ҡәҙәре юғалттың", - ти Хоҙай. "Ләкин минең юғалтыуҙарым бит кешенекен үҙләштергәнгә ҡарағанға мең тапҡырға күберәк", - тип ҡаршы төшә бай. "Һиңә эшләгән хеҙмәтселәрҙең юғалтыуҙарын иҫәпләгән аныҡ үлсәү бармы һуң? Һин уларҙың күҙ йәштәрен, тәнен ташлап киткән һаулығын, мохтажлыҡтарын һәм аслығын, йән әрнеүҙәрен иҫәпкә алдыңмы?"- ти Аллаһ. "Миңә ҡарата быдай ғәҙелһеҙлек күрһәткәс, һин Аллаһ түгел! - тип ҡысҡыра бай ярһып. - Һин мин түләп еткермәгәндән күберәкте тартып алдың минән". "Ә бит һин хеҙмәтсенән түгел, үҙеңдән тартып алдың. Ошоно аңламай тороп, һин юғалтыуҙарҙан туҡтамаясаҡһың", - ти Хоҙай. Байҙың күңелен асыу һәм ҡарғыш ялмап ала. Хәҙер инде уның күҙҙәре йәш менән тулыша. Әммә бар байлығын юғалтҡандан һуң да аҡыл алмай, тағы байығыу тураһында хыяллана. Үҙ хәлен еңеләйтеү өсөн ул тағы ла башҡаларҙы талай, тағы ла юғалта. Ғүмер ахырында үлем түшәгендә ыңғырашып ятҡанда ла ул барыһын да - Аллаһты ла, тормошто ла, кешеләрҙе лә ҡарғап ятыуын дауам итә. Ул шулай Бөйөк Хәҡиҡәт Законын аңламай теге донъяға күсә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Азамат ӘБҮТАЛИПОВ, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru** **kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 14 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 3709